Ер йөҙөндә йәшәгән һәр бер халыҡтың үҙ Рух ҡошо була. Һәр халыҡ үҙ Рух ҡошо менән бергә барлыҡҡа килә. Рух ҡошо халыҡтың улдарының һәм ҡыҙҙарының күңел йылылығынан көс ала. Ә күңел йылылығы халыҡтың үҙ булмышына, үҙ моңона, теленә һөйөүенән, бер-береһенә булған күңел тартымынан, киләсәк алдындағы бурыстарына яуаплылыҡ тойғоһонан ярала. Ошо йылылыҡтан көс алған Рух ҡошо иһә халыҡҡа оло маҡсат менән йәшәүгә ынтылыш, саялыҡ, ғорурлыҡ, ихтыяр көсө рәүешендә рухи ҡеүәт бирә.

(10-сы биттә уҡығыҙ).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

17 - 23 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№46 (516)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Көн яманы китеп барыр,

китмәҫ әҙәм яманы"



3

Еребеҙҙе һаҡлаусы Сура...

Әбйәлилгә ҡайтты



7

Һәр көнөнән йәм табып,

башҡаларға кәрәкле булып йәшәй ул



8-9

Бала тапмаҫ...

ҡатын булмаҫ





12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө йәштәрҙең бер өлөшө көнбайышса һәм америкаса йәшәү рәүешен өлгө күреп, космополитка әүерелә һәм илһөйәрлек тойғоһон юғалта бара түгелме?

***Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:*** Һуңғы йылдарҙа, ысынлап та, дәүләт сәйәсәтендә күп кенә мәсьәләләрҙе көнбайыш тибындағы өлгөгә ҡороу күҙәтелә. Эйе, америкаса итеп ҡоролорға була ул йортто йә башҡа берәй ҡоролманы. Техниканы америкаса эшләтергә була, әммә йәмғиәтте америкаса ҡороп булмай. Беҙҙең үҙебеҙҙең ҡоролош, үҙебеҙҙең менталитет, үҙебеҙҙең күп милләтле Ватаныбыҙ бар. Әгәр ҙә кемдер үҙ Ватанын һанламай, сит илгә табына икән, тимәк, ул үҙенең меҫкенлеген күрһәтә. Американы маҡтап, ул барыбер американы булып китмәйәсәк, шул уҡ ваҡытта үҙ иленән дә ваз кисеүсе бер маңҡорт булып, дала ҡамғағылай, үҙенә урын тапмай, бәрелеп-һуғылып ғүмере үтәсәк. Йәштәрҙең ҡайһы берҙәре Америкага китеп, ундағылар эшләмәгән "ҡара", бысраҡ эштәрҙе башҡарып йөрөй. Йәнәһе лә, ҡайҙа яҡшы туләйҙәр, уға шунда һөйбәт - был донъяға нәҡ әлеге космополитарса мөнәсәбәт. Әлбиттә, беҙҙең илдә лә лайыҡлы эш хаҡы алырға, матур йәшәргә, һоҡланғыс тауарҙар етештерергә мөмкин булыр ине, әгәр үҙебеҙҙең интеллектуаль потенциал дөрөҫ һәм тулы файҙаланылһа. Үкенескә ҡаршы, беҙ төрлө өлкәләрҙә туктауһыҙ реформалар эшләп, реаль мөмкинлектәребеҙҙе юҡҡа сығарабыҙ. Мәғариф өлкәһен генә алып ҡарайыҡ миҫалға. Балаларҙы, уҡытыусыларҙы, атаәсәләрҙе нисәмә йылдар стресста тотҡан бөткөһөҙ "яңылыҡтар" ысынында иһә шул уҡ Америка һәм көнбайыш өлгөһөнә күсеү. Дөрөҫөн әйткәндә, был кеше күңелендә ватансылыҡты юҡ итеүгә йүнәлтелгән саралар, тигән уйҙамын. Ил етәкселегенең һуңғы йылдарҙағы милли сәйәсәт өлкәһендәге "яңылыҡ"тары ла аңлашылып бөтмәй. Дөрәҫөрәге, милләттәргә ҡаршы сәйәсәте, тип әйтеү урынлыраҡ булыр, сөнки әсә телдәрен уҡытыуҙы тыйып, улар балаларҙы маңҡорт яһаясаҡ. Телһеҙ кеше бер ваҡытта ла ватансы, илһөйәр булмай.

***Руслан ЯҠУПОВ, хеҙмәткәр:*** Тыуған ил нимәнән башлана, тигән һымаҡ, илһөйәрлектең дә сығанаҡтары хаҡында яҡшы ғына уйланып алһаң, һеҙҙең һорауҙа ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ, миненсә. Сөнки илебеҙ 1990 йылдарҙан алып төрлө өлкәләрҙә көнбайыш күсермәһен әүҙәм тиражлай башланы һәм шуның менән бик ҙур хата яһаны. Аңлауымса, рухи донъябыҙҙың нигеҙе - матди йәшәйеш ҡанундарында (хәтерләгеҙ әле: "Бытие определяет сознание"). Иҡтисадта аҙ ғына низер аңлаған кеше лә төшөнә торғандыр: көнбайыш капитализм ахырғы көндәрен иҫәпләй һәм, үҙенән алдағы формациялар кеүек үк, быны-бына юҡҡа сығыу алдында тора. Һәм беҙгә йәшәйешебеҙҙең артабанғы үҫеш юлы итеп күрәләтә ошондай ҡоролош моделен һайлауҙың аҡыллылыҡ билдәһе түгел икәнлеген иҫбатларға кәрәкмәй. Миненсә, донъя үҫеше өсөн берҙән-бер дөрөҫ юл - ул әлеге лә баяғы социализм һәм коммунизм идеяһы. Һуңғы һылышын алыусы капитализм ҡоролошона ҡаршы ҡуйырлыҡ мин башҡа төрлө өлгө күрмәйем. Социализм шарттарында йәшәгән һәм эшләгән Ҡытайға ғына ҡарағыҙ әле - ул донъя иҡтисадының төп этәргес көсөнә әүерелә бара түгелме? Ошо уҡ юлдан атлаусы Беларусь Республикаһын йә булмаһа Венесуэлланы алайыҡ: бер ҙә насар йәшәмәйҙәр. Ниһайәт, ошо урында һеҙҙең һорауға аныҡ яуап бирергә лә ваҡыттыр, тик һорауға - һорау менән: ошондай шарттарҙа илебеҙ йәштәре ниндәй ватансылыҡ традицияларында тәрбиәләнә? Ватаныбыҙ менән ғорурланырлыҡ ниндәй ҡаҙаныштар яуланыҡ һуңғы йылдарҙа? Көлкөләр, бәлки, бик ҡыҙғаныс ҡына булмаһа, ләкин ҡаҙаныштар тигәндә, ниҙәләр, донъяның иң байҙары рейтингын башлап килеүсе Рәсәй олигархтары ғына хәтергә килә лә ҡуя... Бәлки, бөтөн мир алдында ил байлығын ҡармап, әкиәттәгесә "һә" тигәнсә серегән байға әүерелгән ана шул ватан олигархтары менән ғорурланырға кәрәктер беҙгә? Ата-бабаларыбыҙ ҡаны ҡойолған данлы тарихыбыҙ менән күпме ғорурланырға була? Үҙебеҙҙән һуң ниндәй тарих ҡалдырырбыҙ - мәсьәлә бына бит нимәлә! Ижад итеүсе, һоҡланғыс хеҙмәт ҡаҙаныштары менән халҡына лайыҡлы тормош тәьмин итеүсе йәмғиәт урынына ҡулланыусылар йәмғиәте "төҙөп" кенә илһөйәрҙәр тәрбиәләп булмай. Барҙы юҡҡа сығарып, йәғни әҙер тәбиғи сеймалды файҙаланып ҡына йәшәүҙең үҙ атамаһы бар. Бындай йәшәү рәүеше ватаныбыҙға ғына түгел, тотош планетабыҙға ҡарата ла кешелекһеҙлек ул.

(Дауамы 2-се биттә).

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АУЫЛ ЯУАБЫ ШУЛАЙ:

## үҙебеҙҙе һаҡлаясаҡбыҙ!




Ауырғазы районының Моразым ауылында социаль-мәҙәни үҙәк асылды. Ул мәҙәниәт йортон, фельдшер-акушер пунктын, спортзалды, компьютер синыфын, ҡурай, хореография бүлмәләрен, китапхананы үҙ эсенә аласаҡ. Үҙәк күңел асыу, ял итеү, мәҙәни яҡтан камиллашыу урыны ғына түгел, глобаллашеу, урбанизация, оптималлаштереу кеүек процестарға ауыл яуабы һәм халыҡты туплаусы йорт буласаҡ.

(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).

Лоҡмановтар ғаиләһе.

✓ *"Беҙ үҙебеҙҙең патриотизм бинаһын хәҡиҡәт нигеҙендә төҙөргә тейешбеҙ һәм һәр ваҡыт, был хәҡиҡәт бигүк "татлы"нан булмаған хәлдә лә, намыҫлы ҡалырға тейешбеҙ", тигәйне ул.*



ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Бөгөнгө йәштәрҙең бер өлөшө көнбайышса һәм америкаса йәшәү рәүешен өлгө күреп, космополитҡа әүерелә һәм илһөйәрлек тойғоһон юғалта бара түгелме?

(Башы 1-се биттә).

***Фәнзилә ИШМӨХӘМӘТОВА, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Совет заманынан алып илһөйәрлек традициялары, ошо рухтағы тәрбиә эше хаҡында юғары кимәлдә мәсьәлә ҡуҙғатылғаны юҡ ине. Ниһайәт, Рәсәй Президенты В.Путин күптән түгел Президент хакимиәтендә Йәмәғәтселек проекттары буйынса идаралыҡ төҙөү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Дөрөҫ, был документ белгестәр аңлатмалары оҙатыуында киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарылманы, шунлыҡтандыр, бәлки, төрлө даирәләрҙә ул төрлөсә фараздар тыуҙырҙы. Яңы ведомство "Рәсәй йәмғиәтенең рухи-әхлаҡи нигеҙҙәрен нығытыу, патриотик тәрбиә өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен камиллаштырыу" менән шөғөлләнәсәк, тиелә документта. Сентябрҙә үк әле Краснодарҙа йәмәғәтселек менән осрашыуында ла Путин ошо мәсьәләгә ҡағылып, Рәсәйҙә илһөйәрлек тәрбиәләү менән шөғөлләнергә "баҙнат итмәүҙәре" тураһында әйтеп киткәйне. "Үҙ Ватанына бысраҡ өйөргә булһа, бында инде күптәр быны айырыуса ҡәнәғәтлек менән эшләй", тип көйөндө Президент. Етмәһә, бындай мөнәсәбәт күптәрҙә ниндәйҙер ҡыйыулыҡ кеүек ҡабул ителә, тип ғәжәпләнде ул. "Беҙ үҙебеҙҙең патриотизм бинаһын хәҡиҡәт нигеҙендә төҙөргә тейешбеҙ һәм һәр ваҡыт, был хәҡиҡәт бигүк "татлы"нан булмаған хәлдә лә, намыҫлы ҡалырға тейешбеҙ", тигәйне ул. Бик дөрөҫ һүҙҙәр, инде артабан да был йәһәттән өндәшмәй ҡалыу мөмкин булмаған эш ине. Әлдә лә бик һуң тотонабыҙҙыр, тип уйлайым, сөнки йәштәрҙә, ысынлап та, үҙ ватанын яманлап, сит илде идеаллаштырыу сире бара. Үҙ идеологиябыҙ булмау сәбәпле телевидение тулыһынса тип әйтерлек Америка йоғонтоһо таһсирендә: көнөтөнө уларҙың фильмдарын, ә иң хәүефлеһе - кескәйҙәргә уларҙың мультиктарын күрһәтәләр. Беренсе программала барған "Голос" конкурсын ҡарайһығыҙмы? Ниндәй матур тауышлы, талантлы йәштәр сығыш яһай! Тик уларҙың унаүһының туғыҙы сит ил йырҙарын башҡара. Ә жюри иҫе китеп, сәпәкәйләп ултыра. Башҡа тапшырыуҙарҙың да күпселеге - Америка телевидениеһы күсермәһе. Ә ниңә үҙебеҙҙең ерлектә, үҙ милли традицияларҙа тапшырыуҙар эшләнмәй? Әйткәндәй, баш ҡалабыҙҙағы заманса мөһабәт кинотеатр комплекстары репертуарҙарына күҙ һалғаныгыҙ бармы? Шулай уҡ тотош мистика, фантастикаға ҡоролған Америка фильмдары баҫып алған репертуарҙы. Мин әле мәҙәни өлкәне генә алдым, ә бит илһөйәрлек тәрбиәләүҙә армия ла мөһим роль уйнай. Бында инде мин - "телһеҙ", беҙҙең армиялағы хәлдәр үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм. Йәштәрҙе уларҙың аңын ағыулап, тәртибен боҙоусы, тормошҡа мөнәсәбәтен бутап, "әҙергә - бәҙер" өйрәтеүсе зарарлы маңҡортлоҡтан йолоп алырға бергәләп тотонмаһаҡ, ҡотҡарыусы Шойгу бер үҙе генә "һауа торошон" үҙгәртә алырмы - билдәһеҙ...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2003 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә** яҙылырға була. Ноябрҙә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыға - **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ түй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

Ә октябрҙә был бүләктәр ошо уҡыусыларыбыҙ өлөшөнә сыҡты: **М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** - Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Гәйнуллинаға, Учалы районы Ҡәйепҡол ауылынан Әклимә Абдрахмановаға, Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Х. Усмановаға, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Ғәлимйән Бәхтегәрәевка;

**Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китабы** - Сибай ҡалаһынан Фәрит Әхмәровҡа, Стәрлетамаҡ районы Отрадовка ауылынан Рима Нуриева, Бөрйән районы Мәндеғол ауылынан Гөлназ Вәхитова, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Камила Насирова, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Сәлих Ғайсаров, Мәләүез ҡалаһынан Ф.Йәрмөхәмәтова, Учалы ҡалаһынан Айһылыу Ғарифуллина, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Л.Шакирова, Әбйәлил районы Йәлембәт ауылынан Ғәйнетдин Шәмсетдинов, Ғафури районы Бурлы ауылынан Светлана Абдуллина, Күмертау ҡалаһынан Ф.Ишкининаға;

**Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китабы** - Ишембай районы Яңы Әптек ауылынан В.Ғәләүетдиноваға, Әбйәлил районы Йәлембәт ауылынан З.Мырҙабулатова, Өфө ҡалаһынан Р.Ғүмәрова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Л.Искәндәрова, Межгорье ҡалаһынан Ф.Әксәнова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Гүзәл Рәхмәтуллина, Тәтешле районы Үрге Тәтешле ауылынан Р.Әхмәтйәнова, Иглин районы Иглин ҡасабаһынан Мәҙинә Мөкминоваға;

**"Айыҡ түй сценарийҙары" китабы** - Баймаҡ районы Үрге Иҙрис ауылынан Рәмзиә Мостафина, Сибай ҡалаһынан Х.Әбүбәкерова, Өфө ҡалаһынан Н.Харрасова, Баймаҡ ҡалаһынан Сәлимә Ғөбәйҙуллина, Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылынан Миңлеғол һәм Урал Ибраҡовтар, Хәйбулла районы Маҡан ауылынан З.Ниғмәтуллинаға.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атайәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Өфө ҡалаһы Октябрь районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓27-28 ноябрҙә Төмәндә "Инфотех-2012" күргәҙмәһе сиктәрендә "Электрон хөкүмәт - төбәк менән идара итеүҙең заманса механизмы" бөтә Рәсәй форумы үтә. Сарала ҡатнашыусы федераль, төбәк һәм муниципаль власть органдарының электрон хөкүмәт булдырыу мәсьәләләрен контролдә тотҡан етәкселәре, консалтинг һәм IT-компаниялар вәкилдәре саҡырыла.

✓Өфөнөң "Глумилино" биҫтәһендә "Газпром трансгаз Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте хеҙмәткәрҙәре өсөн сиратҡағы күп ҡатлы йорт төҙөлдө. 138 фатир өй туйлаусыларға уникаль корпоратив ипотека кредиты программаһы буйынса һатылаcаҡ, уға ярашлы процентарҙы түләүгә сығымдарҙы предприятие үҙ өҫтөнә аласаҡ. Объектты файҙаланыуға тапшырыу айканлы үткәрелгән тантанала Өфө округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты һәм былай тине: "Газпром трансгаз Өфө" - социаль йүнәлештә эшләгән компания. Уның хеҙмәткәрҙәре өсөн төҙөлгән йорт юғары сифатлы, баш ҡаланың өлгөлө объекттарының береһе булып тора".

✓Өфөлә Башҡортостан муниципаль берәмектәренең IV съезының ойоштороу комитеты ултырышы үтте. Съезд 14 декабрҙә Өфөлә үтә. Сарала урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәрен билдәләү, урындағы үҙидара проблемаларын тикшереү планлаштырыла. Съезд сиктәрендә тематик күргәҙмә, шулай уҡ урындағы үҙидараны үҫтереү мәсьәләләрен яҡтыртҡан методик әҙәбиәт, баҫма матбуғат, шул иҫәптән "Башҡортостан Республикаһының Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы менән сығарылған "Башҡортостандың муниципаль хәбәрсеһе" ("Муниципальный вестник Башкортостана") гәзитенең презентацияһы ойоштороласаҡ.

✓28 ноябрҙә Өфөлә XII "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк проблемалары" төбәк конференцияһы үтә. Конференцияла ҡатнашыусылар төрки, славян, фин-уғыр, кавказ, монгол диалектологияһының көнүҙәк проблемаларын, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты мәсьәләләрен һәм уны өйрәнеү мөмкинлектәрен, диалект шарттарында туған һәм дәүләт телдәрен уҡытыу мәсьәләләрен тикшерәсәк. Ғилми форум Өфө ҡалаһы, Зәки Вәлиди урамы, 34 адресы буйынса Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында үтәсәк.

✓ *Төрлө афәттәрҙән ҡасып Уралға һыйыныусы ырыуҙарҙы ундағы көслө ядро үҙенә тартҡан. Был хаҡта бихисап тарихи яҙмалар бар. Был күренеште мин Башҡорт этник империяһы күренеше тип тә атағайным.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# “КӨН ЯМАНЫ КИТЕП БАРЫР,

## китмәҫ әҙәм яманы”

**Алдағы һандарҙа "Үлән үҫкән ерендә генә үҫә" тигән әйтем хаҡында уй йөрөткәндә беҙҙең эраға тиклем йәшәүсе грек философы Геродоттың "Тарихтар" китабында яҙған фекерен телгә алғайныҡ. Был һүҙҙәр үҙ милләте яҙмышына битараф булмағандарҙы тәрән уйға һалмай ҡалмайҙыр, тим: "...Ә бит ул бай һәм мул тормошло илдәрҙә ғәҙәттә кешеләрҙең һәлкәү һәм иркәсел булыуы хаҡында әйткәйне. Бер үк илдә бер үк ваҡытта ауыҙ һыуы ҡорорлоҡ татлы емештәр үҫә һәм батыр яугирҙар тыуа алмай. Быны белгән фарсылар Кирҙың фекере менән килешеп, үҙ ниәттәренән баш тартты. Улар байлыҡтан һығылып торған тигеҙ урында ҡол булып йәшәүҙән фәҡир, ер байлыҡтары ҡойто урында башҡа халыҡтар өҫтөнән хакимлыҡ итеп йәшәүҙе өҫтөн күрҙе..."**

Үкенескә күрә, тәбиғәттең, климаттың кешелек, йәмғиәт, милләт үҫешенә йоғонто яһаған асылы фәндә бик аҙ өйрәнелгән. Бер нисә генә махсус хеҙмәттәрҙе иҫәпкә алмағанда, хатта өйрәнелмәгән дә тиерлек. Әммә Геродоттың юғарыла килтерелгән яҙмаһын күҙ уңында тотҡанда, был өлкәлә юғары кимәлдә фекер йөрөтөүҙәр беҙҙең эраға тиклем ғилем кимәленә үк күтәрелгән булыуы шикһеҙ.

Был тәжрибә, был ғилем беҙҙең халыҡта борон-борондан күренекле мәғрифәтсе Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙенең "Йәдкәр" китабында яҙып ҡалдырғанса, "йондоҙҙарға ҡарап эш итеү" рәүешендә йәшәгән. "Үлән үҫкән ерендә генә үҫә", "Көн яманы китеп барыр, китмәҫ әҙәм яманы" әйтемдәренең дә тамырын тап шул дәүерҙән эҙләү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Үкенескә күрә, боронғоларҙың был ғилеме беҙгә иң примитив "Йондоҙнамә" формаһында ғына килеп еткән. Унда ла кеше асылы хаҡында йыл миҙгелдәренә бәйле рәүештә генә һүҙ алып барыла, климат, тәбиғәт торошо хаҡында бер генә һүҙ ҙә әйтелмәй. Шул уҡ ваҡытта "Йондоҙнамә" фаразлағанса, кешенең асылы үҙгәрмәй, йәғни ул йылдың ниндәй айында-көнөндә тыуһа, шуға бәйле уның характеры, асылы, яҙмышы формалаша булып сыға. Бында хатта көн яманы киткән осраҡта ла, йәғни һауа торошо яҡшырһа ла, кешенең ыңғай яҡҡа үҙгәрмәүе, яманлығы китмәүе бәйән ителә. Тик шулаймы икән?

Шулай итеп, беҙҙең алға ике һорау килеп баҫа:

1. Кешенең асылы, булмышы "Йондоҙнамә"ләгесә уның йылдың ҡайһы айында-көнөндә тыуыуына бәйлеме?

2. Климат, тәбиғәт үҙенсәлеге кешенең асылында, булмышында ни рәүешле һәм ни ҡәҙәрем сағыла?

Бер яҡтан ҡарағанда, юғарыла ҡуйылған һорауҙар бик ҙур, мөһим һәм уларға яуап бирер өсөн был проблемаларҙы һәр аспектында (әйтәйек, географик, климатик, биохимик, физиологик, психологик, этносоциологик һ.б.) ентекле тикшерергә, махсус тикшеренеүҙәр үткәрергә, бихисап ғилми хеҙмәттәр яҙырға кәрәк булыр ине. Әммә бер хәҙисте генә килтереү ҙә күп кенә һорауҙарға яуап бирә ала: "Әгәр ҙә тау урынынан күсенһә - ышанығыҙ, тик кеше үҙ асылын үҙгәртһә - ышанмағыҙ. Кеше үҙ холҡон үҙгәртә алмай, ул бары тик тыумыш асылына ғына ҡайта ала..."

Был хәҙистә ике төрлө ҡапма-ҡаршы фекер әйтелә. Тәүгеһе: кеше үҙ холҡон үҙгәртә алмай, йәғни көн яманлығы китһә лә, кеше яманлығы китмәй. Икенсеһе: кеше бары тик тыумыш асылына ғына ҡайта ала, ә кешенең тыумыш асылы - сабый сағындағы сафлығы. Тимәк, кеше үҙгәрә ала. Әммә быны балиғ булған кешенең бөтөнләй икенсе, быға тиклем таныш булмаған юҫыҡҡа үҙгәреүен түгел, ә ҡасандыр үҙенә хас булған сифатына ҡайтыуы тип аңларға кәрәк. Тик үҙ асылыңа ҡайтыуҙы үҙгәреү тип атарға буламы икән? Ул бит фәҡәт ҡасандыр үҙеңә хас булған сифатҡа ҡайтыу ғына. Шул уҡ ваҡытта "үҙгәреү"ҙең тамырында "үҙгә" йәғни "үҙеңә" мәғәнәһен дә танымау мөмкин түгел. Һүҙҙең килеп сығышын ошо рәүешле тикшерһәк, үҙгәреүҙе барыбер ҙә "үҙлегеңә, үҙ асылыңа" ҡайтыу тип тә аңларға була.

Фән, ғилем тәбиғәттең, климаттың кешегә, йәмғиәткә, халыҡҡа йоғонтоһон аҙ өйрәнгән һәм өйрәнә, тиһәк тә, Владимир Клименко тигән ғалимдың "Климат һәм тарих" тигән ике өлөштән торған хеҙмәте айырыуса иғтибарға лайыҡ. Ғалим ошо хеҙмәте нигеҙендә "Восток" журналында (2000 йыл, 1-се һан) баҫтырған "Конфуцийҙан Мөхәммәткә тиклем климат һәм тарих" тигән мәҡәлә лә баҫтырған. 2009 йылда ғалимдың "Климат: тарихтың уҡылмаған китабы"(Мәскәү. "МЭИ" нәшриәт йорто) донъя күрә.



Тарихты нимә үҫтерә? Кешенең аң һәм ихтыяр көсөмө, Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәтеме, әллә тәбиғәттең торошомо? Китапта һуңғы биш мең йыллыҡ климатик һәм социаль тарихтың төп ваҡиғаларына сағыштырмаса хронология төҙөлгән. Хронология шуны күрһәтә: климаттың локаль рәүештә насарайыуы дәүерҙәрендә (климаттың һыуыныуы йәки яуым-төшөмдөң аҙайыуы йәки икеһе лә күҙәтеләгәндә) ҡәбиләләрҙең һәм халыҡтарҙың берләшеүе, күпләп халыҡтарҙың бер урындан икенсе урынға күсенеүе, яңы дәүләттәрҙең барлыҡҡа килеүе, быға күрелмәгән мәҙәниәт һәм технологик үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә кеше аңының һәм интеллектының ғәҙәттән тыш киҫкенләшеүе өҫтөнлөк ала. Ә инде климаттың яҡшырыу дәүерҙәре тарихта бөтөнләй башҡа төрлө эҙҙәр ҡалдыра: был осраҡта үҙәк власть йомшара, көсһеҙләнә, тыштан ҡарағанда сәбәпһеҙ булып тойолған эске ҡапма-ҡаршылыҡтар киҫкенләшә, быуаттар буйына йәшәгән дәүләттәр тарҡала, империялар емерелә. Климаттағы үҙгәрештәр бөтә донъя тарихы драмаһы барған сәхнәһе, пассив фоны ғына түгел, ә шул драманың мөһим роль башҡарыусыһы.

В. Клименко донъя диндәренең барлыҡҡа килеүен дә климат үҙгәреүенә бәйләй. Әйтәйек, ислам һәм христиан диндәре, шулай уҡ ҡасандыр йәшәгән һәм юҡҡа сыҡҡан зороастризм менән манихейство Алғы Азияла кеше йәшәр өсөн ҡулайһыҙ булған климат шарттары күҙәтелгән дәүерҙәрҙә формалаша. Тимәк, бында көн итер өсөн ауыр булған йылдарҙа кеше үҙенә ышыҡ, һыйыныр урынды Аллаһы Тәғәләлә, диндә, бауырҙашында эҙләй һәм таба, тип әйтергә лә була. Был күҙлектән ҡарағанда, әлеге климаттың йылыныуы, йылдарҙың ҡоро килеүе шарттарында алдағы ун йылда кешелектең рухи донъяһында ҙур ҡаҙаныштар көтөргә була, тимәк.

Ғалим шулай уҡ тәбиғәт-климат шарттарының этностарҙы, халыҡтарҙы барлыҡҡа килтереүсе мөһим фактор булыуын да билдәләй. Был хаҡта мин "Инһәң - ил, сыҡһаң - яу", "Ауылы берҙең - ҡәүеме бер" тигән мәҡәлдәр хаҡында һүҙ алып барғанда әйтеп үткәйнем инде. Әйтәйек, йөҙҙән ашыу ырыуҙарҙы Уралға - башҡорт ҡәүеменә берләштереүсе сәбәптәр араһында тәбиғәт-климат факторы мәсьәләһе хаҡында. Ундай шарттарға Туфан ҡалҡып һыу баҫыуҙар, ер өҫтөнөң һыуыныуы, ҡоролоҡтар һәм башҡалар инә. Әлбиттә, Ер шарының төрлө ерҙәрендәге төрлө афәттәрҙән ҡасып Уралға һыйыныусы ырыуҙарҙы ундағы көслө ядро үҙенә тартҡан. Был хаҡта бихисап тарихи яҙмалар бар. Был күренеште мин Башҡорт этник империяһы күренеше тип тә атағайным. "Тәбиғәттә насар һауа торошо юҡ" ти урыҫтар. Дөрөҫтөр. Сөнки кемдер берәүгә ярамаған, оҡшамаған дауылдар, ҡойма ямғырҙар, ыжғыр бурандар икенселәрҙең күңелендә илаһи гармония тойғолары уята, йә - киреһенсә.

Шулай ҙа мин йыш ҡына ни өсөн атай-олатайҙарыбыҙ ошо ҡырыҫ тәбиғәтле Урал тауҙарын төйәк итте икән, ниңә йыл әйләнәһенә йәмле йәй хөкөм һөргән, емеш ағастары үҫкән диңгеҙ буйҙарында ҡалмаған, тип уйланам. Ә бит халҡыбыҙ тарихына бороло п ҡараһаҡ, ҡайһы бер ырыуҙарҙың шундай мәңгелек йәйҙәр илдәрендә йәшәүе лә билдәле. Рухыбыҙ мәңге уяу булһын, быуат һайын балҡыһын һәм халҡыбыҙҙы һаҡлаһын өсөн дә төйәк иткәндер улар Уралтауҙы. Хәйер, беҙ ошонда яралғанбыҙ ҙа инде...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Милли идеяға торош" рубрикаһында байтаҡ башҡорт халыҡ мәҡәлдәренә эйәреп фекер ҡорҙоҡ, аңлатмалар бирҙек. Шуны аңланыҡ: һәр мәҡәл нигеҙендә халҡыбыҙҙың бөтмәҫ аҡыл хазинаһы, бай тормош тәжрибәһе, донъя фәлсәфәһе ята. Ул аҡылды бер генә мәҡәләлә һөйләп, уҡыусылар күңеленә тапшырып бөтөп тә булмай. Шуға ла ғәмле, рухлы уҡыусыларыбыҙҙы һәр мәҡәлебеҙҙең дауамын яҙырға, үҙ фекерен еткерергә саҡырабыҙ. Хатхәбәрҙәр көтәбеҙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Серго Орджоникидзе исемендәге Мәҙәниәт һарайы (әле Өфө дәүләт нефть техник университетының Йәштәр һарайы) алдындағы майҙанда тәүге шыршы үҙ урынын алды. Тиҙҙән уны уйынсыҡтар һәм гирляндалар менән биҙәйәсәктәр. Шыршының бейеклеге - 20 метрға яҡын. Яңы йылдың тәүге ҡунағы 13 ноябрҙә республиканың Благовещен районынан килтерелгән.

✓А.Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфөләге филиалы тарафынан ойошторолған Иран сәнғәте көндәре Башҡортостан баш ҡалаһында 15-25 ноябрҙә үтә. Иран сәнғәте көндәре сиктәрендә өфөләләр иран милли сәнғәт изделиелары, сувенир продукцияһы күргәҙмәһендә ҡатнашып, биҙәү-ҡулланма сәнғәте буйынса "Иран - әкиәт донъяһы" конкурсын ҡарай аласаҡ. Иран сәнғәте көндәрен асыу тантанаһы Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфөләге филиалында 15 ноябрҙә 11 сәғәттә үтә.

✓14-18 ноябрҙә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте хеҙмәткәрҙәре республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарында китап продукцияһы күргәҙмә-йәрминкәһе ойоштора. Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенә 200 йыл тулыуға арналған саралар сиктәрендә улар Баймаҡ, Бөрйән районларына барырға ниәтләй.

✓Эшһеҙлек буйынса пособиеның максималь күләме 5635 һум тәшкил итә, бындай пособиены хеҙмәт биржаһында рәсми рәүештә теркәлгән өфөләләрҙең яртыһы ала. Эшһеҙҙәрҙең 30 процентына пособиеның минималь күләме билдәләнгән, ул 977,5 һумға тиң. Әлеге ваҡытта Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә 12500 вакантлы урын тураһында мәғлүмәт бар. Шул уҡ ваҡытта ундағы вакансияларҙың 40 процентының эш хаҡы кимәле 10 мең һумдан кәмерәк тәшкил итә.

✓VIII "Ҡала мөхите" Халыҡ-ара социаль реклама фестивале конкурсына 600-ләп эш ҡабул ителде. Хәҙер жюри ағзалары уларҙы һайлап алыу эштәре менән мәшғүл. 23 ноябрҙә Өфө йәштәр һарайында иң яҡшы фестиваль эштәре күргәҙмәһе, социаль реклама өлкәһендәге белгестәр менән мастер-кластар үткәрелә. Ә 27 ноябрҙә Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Телеүҙәк" тура эфирында ошо сараға арналған программа сығасаҡ.

**"Башинформ"дан.**

ИҠТИСАД ХӘЛДӘРЕ

# ДОЛЛАР ҺӘМ ЕВРО ЯНЫНДА...

## һумға урын бармы?

**Рәсәй хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев Ялтала уҙған Халыҡ-ара инвестицион форумдағы сығышында "Һумдың бөтә донъя резерв валютаһы булыу мөмкинлеге юғары", тип билдерҙе. Ләкин иҡтисад өлкәһендә эшләүсе белгестәр был фекерҙе дәррәү яҡлап сығырға ашыҡмай.**

Рәсәй һумын бары тик төбәктең резерв валютаһы булараҡ ҡына ҡулланыу хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин булыр ине, ләкин ул был ролдә лә үҙ иңенә ала алмаясаҡ, тип белдерә эксперттар.

"Риком-Траст" инвестицион компанияһының аналитика департаменты етәксеһе Олег Абелев фекеренсә, Рәсәй һумының статусын күтәреү өсөн ил иҡтисадында долларҙы ҡулланыуҙы кәметеү һәм милли финанс секторын үҫтереү кеүек мәсьәләләрҙе хәл итеү мөһим.

Ә "Система" финанс компанияһы иҡтисадсыһы Евгений Надоршин иһә һумды былдай ролдә күреү өсөн уның тотороҡло һәм ышаныслы булыуы шарт, тип билдәләй. Ләкин был йәһәттән Рәсәй валютаһы маҡтана алмай, сөнки илдә әле булһа ҙур иҡтисади хәүеф һаҡлана, ти ул. "Беҙҙең хатта үҙ резиденттарыбыҙ һумды инвестиция өлкәһендә файҙаланыу һәм һаҡлау өсөн яраҡлы итеп тапмай икән, сит ил граждандарын ылыҡтырыу ауыр буласаҡ", тигән ышаныста белгес.

Ә "Альфа Банк"тың баш иҡтисадсыһы Наталия Орлова иһә, һумдың мәртәбәһен күтәреү өсөн ил иҡтисадының үҫеү перспективаһы юғары булырға тейеш, тип билдәләй. "Һуңғы йылдарҙа Рәсәй донъя масштабында үҙенең уңыштары менән әллә ни маҡтана алмай, ә ил эсендәге ҡаҙаныштар ғына ил валютаһын донъя кимәленә күтәреү өсөн бик аҙ", ти иҡтисадсы.

Шулай ҙа ҡайһы бер эксперттар фекеренсә, көнбайыш инвесторҙары тарафынан Рәсәй һумына ҡыҙыҡһыныу бар, тимәк, күпмелер ваҡыттан һуң, дөрөҫ эш алып барған осраҡта, һумдың доллар һәм евро кимәленә күтәрелеү мөмкинлеге юҡ түгел. Тик бер йүнәлештә генә эксперттарҙың фекере тура килә. Ул да булһа, һумдың донъя валютаһы кимәленә күтәрелеүенә макроэкономик күрһәткестәрҙән тыш, бар донъя тарафынан Рәсәйҙе, уның мәҙәниәтен, халҡын ҡабул итә алмау кеүек психологик аспекттарҙың да ҡамасаулауы. Бер һүҙ менән әйткәндә, сит ил вәкилдәре һумды түгел, ә, тәү сиратта, Рәсәй халҡын ҡабул итә алмай. Шуға күрә, Рәсәй ниндәй генә оло иҡтисади үрҙәр яуламаһын, уның халҡына, тотош илгә ҡарата булған ышанмаусанлыҡ барьеры юғалмай тороп, был мәсьәләлә алға китеш булмаясаҡ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АУЫЛ ЯУАБЫ ШУЛАЙ:

## үҙебеҙҙе һаҡлаясаҡбыҙ!



“Тере ауыл” проектында ҡатнашыусылар.

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

Ауырғазы районының иң ҙур ауылдарының береһе булған Мораҙым да республиканың күп ауылдарына хас проблемалар ҡосағында йәшәй. Был ауылда ла мәктәп йәшендәге балалар һаны иң яҡшы йылдағы күрһәткестәр менән сағыштырғанда 2-2,5 тапҡырға кәмегән. Эшһеҙлек, күңел төшөнкөлөгө, ҡайһы бер башҡа кире күренештәр - былар мораҙымдар өсөн дә ят түгел. Ләкин Мораҙым ошондай ҡыйынлыҡтарға килеп төртөлгән күпселек ауылдарҙан уларҙан сығыу юлдарын әүҙем эҙләүе һәм табыуы менән айырыла. Шәхси фермер хужалыҡтары артыуы, халыҡтың тырышып-тырмашып донъя көтөүе, "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыу ошоно раҫлай ҙа инде.

Ауыл, тыуған төйәк өсөн янып-көйгән кешеләр ҙә күп бында. Уларҙың һүҙ ярҙамы, кәңәше, дөрөҫ юлға йүнәлтеүе лә ярҙам итә Мораҙым халҡына. Улар бигерәк тә ауылдан сыҡҡан шәхестәрҙән йәмәғәт эшмәкәре Салауат Килдиңга рәхмәтле. Әлеге социаль-мәҙәни үҙәктең төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылыуы күп йәһәттән уның ярҙамы менән атҡарылған. Ғалимдар Фәнүзә Нәҙершина, Рәшит Шәкүрҙең дә ярҙамы тейеп тора ау-

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠАЗА КҮРЕҮСЕЛӘР...

## урамда ҡалмай

**Стеналары ҡара янып, һерәйешеп ултырып ҡалған йорттағы фажиғәне аҡҡа мансырға теләпме, әллә ҡара ҡайғыға ҡалған кешеләрҙең күңелен саҡ ҡына аҡҡа сорнау ниәтенәнме, буранлап-буранлап ҡар яуып, төүлек тигәндә ысын ҡыш килде лә ҡуйҙы. Әммә аҙна башында баш ҡаланың Фурманов урамындағы бер йортҡа ҡунаҡлаған "ҡыҙыл әтәс" үҙенең эшен эшләп өлгөргәйне инде. Уйлап ҡараһаң, ҡуҙ йомоп асҡансы 63 кеше ҡыйыҡһыҙ тороп ҡалды. Ләкин урамда түгел…**

Журналистар өсөн ойошторолған брифингта Өфө ҡала округы хакимиәтенең Граждандарҙы һаҡлау идаралығы начальнигы Александр Сопин зыян күреүсе 43 кешенең ҡала хакимиәтенең резерв фондындағы торлаҡтарына урынлаштырылыуын, ә 20 кешенең былдай ваҡытлыса торлаҡҡа мохтажлыҡ кисермәүен белдерҙе.

- Юҡһа, ҡайһы бер матбуғат саралары "кайнар" мәғлүмәт артынан ҡыуып, хаталарға юл ҡуя, - тип белдерҙе ул. - Өфөлә әлеге ваҡытта 29 мең ағас йорт иҫәпләнә, уларҙа көн һайын тиғәндәй 2-3 янғын осрағы теркәлә. Ә былдай масштаблы күренештәргә килгәндә инде, 2005 йылда - 80, 2006 йылда - 33, 2008 йылда - 20, 2009 йылда - 98, 2010 йылда - 39, 2012 йылда 46 кеше янғын һөҙөмтәһендә ҡыйыҡһыҙ тороп ҡалған осраҡтар булды. Әммә баш ҡалала 2002 йылда "Берҙәм ҡала" тип аталған ғәҙәттән тыш резерв торлаҡ фонды ойошторолғайны һәм ул үҙ эсенә 450 фатирҙы ала. Әлеге көндә 300 фатирҙа яңғындан зыян күреүселәр йәшәй.

Александр Леонидович әйтеүенсә, был фатирҙарҙа кешеләр тәүге өс айҙа бушлай йәшәй, көндәлек көнкүреш әйберҙәре менән тәьмин ителә. Был йәһәттән инде баш ҡала округы хакимиәтенең Социаль яҡлау идаралығы, Рәсәйҙең "Ҡыҙыл Тәре" ойошмаһы Башҡортостан төбәк бүлексәһе ҙур ярҙам күрһәтә. Өс айҙан һуң коммуналь хеҙмәт өсөн түләүҙәрҙе граждандар үҙҙәре атҡара.

Был фатирҙарға урынлашыу өсөн документтарҙан ни бары яңғындан зыян күреү һәм граждандың ысынлап та баш ҡала теркәүе булыуын раҫлаусы справкалар ғына кәрәк. Зыян күреүселәр ваҡытлыса торлаҡҡа килешеү нигеҙендә индерелә һәм алты айға тиклем тыныс йәшәй ала. Ошо ваҡыт эсендә ул үҙенең ҡыйыҡын булдырыу (фатирын ремонтлау, икенсе ерҙә йорт төҙөү һ.б.) йүнен күрергә тейеш. Әгәр граждан ҡуҡтән төшкәнгә генә өмөтләнә икән, ундайҙарҙы алты айҙан һуң суд аша сығаралар, ә инде тырышып та ярты йылда ҡыйыҡлы булып өлгөрмәүселәргә йәшәү ваҡытын оҙайталар. Муниципаль йорттарҙа йәшәүселәр иһә йорт тулыһынса тергеҙелгәнгә тиклем резерв фатирҙарҙа йәшәй ала.

**Әйткәндәй, былдай ғәҙәттән тыш резерв фонд йорттары Рәсәйҙең бер генә төбәгендә лә юҡ. Шуға ла төрлө субъекттарҙан баш ҡалаға тәжрибә өйрәнергә киләләр. Ә өйрәнәһе нәмәләр байтаҡ, сөнки ғәҙәттән тыш хәлдәр ваҡытында иҫәп көндәр, сәғәттәр менән түгел, минуттар, секундтар менән һанала, һәм һәр хеҙмәттең үҙ эшен аныҡ, теүәл, тиҙ башҡарыуы, иң мөһиме - кеше ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыуы зарур.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Әлеге ваҡытта Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә иҫәптә торғандарҙың 38 проценты - юғары белемле, 25,5 проценты - урта һөнәри белемле, 15,5 проценты - башланғыс һөнәри белемгә эйә. Шул уҡ ваҡытта Өфөнөң хеҙмәт баҙарында элеккесә эшсе һөнәрҙәре талап ителә. Өфөлә арматурасы, бетонсы, ташсы, балта оҫтаһы, маляр, иретеп йәбештереүсе, токарь, электрогазосварщик, шулай уҡ автомобиль йөрөтөүсе, кондуктор, урам һепереүсе, юл хеҙмәткәре, һатыусы, ашнаҡсы һәм кондитерҙарға ихтыяж ҙур. Бынан тыш хеҙмәт баҙарында төрлө йүнәлештәге агенттар, балалар баҡсаларына тәрбиәселәр, менеджерҙар, шәфҡәт туташтары һәм инженерҙар талап ителә.

✓2013 йылдың 1 июленән Рәсәйҙә йылылыҡ энергияһына һәм һыу менән тәьмин итеүгә тарифтар артасаҡ. Йылылыҡ энергияһына хаҡтар 2,7-19,6 процентҡа артһа, һыу менән тәьмин итеүгә тарифтар 5,9 проценттан алып 25,2-гә тиклем артасаҡ - һәр төбәктә хаҡтарҙы үҙ аллы билдәләйәсәктәр, тип хәбәр иттеләр Тарифтар буйынса федераль хеҙмәттән. 2013 йылдың тәүге ярты йылында тарифтарҙы арттырыу ҡаралмай. 2013 йылдың 1 ғинуарынан алып шул уҡ йылдың 1 июленә тиклем 2012 йылдың 31 декабрендә билдәләнгән хаҡтар һаҡланасаҡ.

✓Республикала йәшәгән, производствола бәхетһеҙлек осраҡтарынан һәм профессиональ ауырыуҙарҙан зыян күргән 31 кешегә автомобиль асҡыстары тапшырылды.

✓2013 йылда Өфөлә йәйәүлеләр өсөн биш ер аҫты үткәүеле төҙөлә башлаясаҡ. Уларҙың дүртәүһе Октябрь проспектында ("Р.Ғарипов исемендәге гимназия", "Мир" фирмаһы", икәүһе - "Спорт" туҡталыштарында) урынлашасаҡ. Шулай уҡ "Актерҙар йорто" туҡталышында Пушкин урамы аша үткәүел төҙөләсәк. Әлеге ваҡытта "Өфө-Аэропорт" юлында ла йәйәүлеләр өсөн ике ер өҫтө үткәүелен төҙөү проекттары экспертиза үтә. 2025 йылға тиклем Өфөнө үҫтереү буйынса генераль планда йәмғеһе 30-ҙан ашыу ер өҫтө һәм ер аҫты үткәүелен төҙөү ҡаралған.

✓27 декабрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында билдәле опера йырсыһы Илдар Абдразаҡовтың хәйриә концерты үтә. Раштыуа концерты "Мәрхәмәт" хәйриә фонды менән ойоштороla. Проектты ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, концертҡа контрамаркалар бирелмәйәсәк, билет хаҡы 2-10 мең һум торасаҡ. Саранан алынған аҡса фонд ҡарауында булған балаларҙы дауалау өсөн тәғәйенләнә.

ылдаштарына, шуға ла улар социаль-мәҙәни үҙәк асылыу тантанаһының түрендә булдылар.

"Мин һеҙҙе гел генә күҙ алдында тотам, эштәрегеҙ, көнитмешегеҙ тураһында белешеп кенә торам", - тигәйне тантаналағы сығышында район хакимиәте башлығы Марат Баязит улы Ишемғолов. Ул һүҙ һөйләп кенә ҡалмай, район ауылдарын һаҡлау юҫығында ниндәйҙер саралар күрергә, эштәр башҡарырға тырышыусыларҙан. Райондағы "Тере ауыл" проекты тап Марат Баязит улы инициативаһы менән тормошҡа ашырыла башлаған. Программаның маҡсаты - шәхси хужалыҡтарға, фермерҙарҙың башланғысына ярҙам күрһәтеү, уларҙы килем алырға өйрәтеү. Программала ҡатнашыусылар "Тере ауыл" бренды аҫтында бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ баш ҡала йәрминкәләрендә, Өфө трассаһында асыласаҡ мини-баҙарҙарҙа үҙҙәре етештергән тауарҙы үҙҙәре һата аласаҡ. Марат Баязит улы әйтеүенсә, Мораҙым ошо программаны хуплап, күтәреп алған иң әүҙем ауылдарҙың береһе. Бөгөнгө көндә бында егермеләп ғаилә "Тере ауыл"да ҡатнаша.

Шуларҙың береһе Батталовтар ғаиләһе. Әлмира һәм Мәжит Батталовтар, барыһын да заманға япһарырға ярамай, тырышлыҡ, теләк булғанда, яйын табып йәшәргә була, тигән фекерҙә. "Ауылда бит һәр нәмә үҙеңдеке, - ти улар.- Умарта тотаһың, мал аҫырайһың, балыҡ ҡармаҡлайһың. Үҙеңә лә, ҡалала уҡыған балаларыңа ла, туғандарыңа ла етә. Ҡайһы саҡта баҙарға, йәрминкәләргә лә сығарып һатабыҙ, ҡулаҡса эшләйбеҙ. Ә шулай ҙа тапҡан малыбыҙ күберәк күстәнәс булараҡ таратыла. Күстәнәскә бирер әйберең булмауҙан да хөртөрәге юҡ беҙҙең өсөн..." Шулай тип, үҙҙәренең киң күңелле, изгелекле ғаилә башлыҡтары икәнен белгертеп ҡуйҙы Батталовтар. Эйе, күстәнәс биреү, һис шикһеҙ, халҡыбыҙҙың матур ғәҙәте. Ләкин халыҡ, тир түгеп эшләгән хеҙмәтенең ҡағыҙлата эквивалентын күрергә, баҙарҙа һатыу итергә өйрәнһә, бик тә яҡшы булыр ине. "Тере ауыл" бренды аҫтында был еңелерәк тормошҡа ашырылырға тейеш. Сөнки һәр кемдең алыпһатарҙарға мөрәжәғәт итмәйенсә, туранан-тура үҙ тауарын үҙе һатыу мөмкинлеге буласаҡ.

Социаль-мәҙәни үҙәкте асыу тантанаһында ҡатнашып, Мораҙымда һоҡланғыс һәм өлгө булырҙай ғаиләләр йәшәүенә шаһит булдыҡ. Шуларҙың береһе - Гөлназ һәм Азамат Фәйзуллиндар. Был ғаилә ете йыл элек балалар йортонан бер малай һәм ҡыҙҙы аҫырауға алған. "Донъя мәшәҡәттәре менән булып йөрөп, үҙебеҙҙең улыбыҙ Илнурҙың үҫкәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ, бала һөйгө килде лә ошо ике етемде ҡосағыбыҙға алдыҡ", - тип һөйләй Гөлнәз Әүхәт ҡыҙы. Үҙҙәренеке кеүек яратып, хәстәрләп үҫтерәләр уларҙы. Улар икеһе лә ауылда иң кәрәкле кешеләр. Гөлназ апай социаль-мәҙәни үҙәктең директоры, хәстәрлекле, уңған, изгелекле булған өсөн ауылдаштары уны "Мать Тереза" тип йөрөтә. Азамат ағай - етмеш һөнәрле оҫта. Һуңғы йылдарҙа ауылда ҡалҡып сыҡҡан йорттарҙың һәр береһенә уның ҡулы тейгән. Йорт йыһаздары эшләүгә лә маһир Азамат ағай.

Ауылда йыр-моңға ғашиҡ ғаиләләр күп. Лоҡмановтар - шуларҙың береһе. Улар 2008 йылда республика кимәлендә үткәрелгән "Ғаилә мозаикаһы" конкурсында лауреат була. Бынан тыш, райондың "Йәш ғаилә" конкурсында ла еңеү яулайҙар. Ғаилә башлығы Венер Хәмит улы әйтеүенсә, балаларының береһен дә йырларға, бейергә көсләп өйрәтмәгәндәр. Тәпәй баҫҡандан алып үк бейей, телдәре асылыу менән йырлай башланылар, ти ул. Өлкән ҡыҙҙары Таңсулпан - студент, Зөһрә менән Илъяс мәктәптә белем ала. Ә Венер ағайҙың тормош иптәше Айһылыу Рәфис ҡыҙы акушер булып эшләй. Хәҙер унын эш урыны яңы социаль-мәҙәни үҙәктә урынлашасаҡ. Ғөмүмән, социаль-мәҙәни үҙәк ошондай ғаиләләргә күңел зауыҡтарын ҡандырыу, физик һәм белем йәһәтенән камиллашыу, сәләмәтлекте хәстәрләү, яңы идеялар менән бүлешеү һәм уларҙы тормошҡа ашырыу урыны буласаҡ, тип ышанғы килә. Шул маҡсаттан төҙөлгән дә инде ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө көндә ҡиммәткә төшәсәк, иҡтисади яҡтан үҙен аҡлаясағы икеле булған проекттарҙан баш тартыу бара. Был хәл иң беренсе сиратта ауылдар иңенә ауырлыҡ килтерә: Мораҙымдағы кеүек социаль-мәҙәни үҙәктәрҙе асыу маҡсатҡа ярашлы түгел тип табыла күп урында. Ә бит ауыл яҙмышы өсөн ысын йөрәктән көйәһең икән, ундағы халыҡҡа йәшәү, эшләү, уҡыу өсөн шарттар булдыр. Ошондай шарттар булдырмай тороп, демографияны яҡшыртып буламы ла, йәштәрҙе ауылдарға йәлеп итеп буламы?..**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**



Фәнүзә Нәзершина менән Рәшит Шәкүр ауылдаштарында ҡунаҡта.



Мораҙым ҡурайсылары.

ҺОРАУ-ЯУАП

## ЭШ БИРЕҮСЕ ҠАРАМАҒЫНДА

**Эштә отпуск графигы төҙөйҙәр. Мин ялды йәйге айҙарға биреүҙәрен һораным, ләкин мине сентябргә яҙғандар һәм май менән сентябрь, йәнәһе, барыбер йәйге осорға ҡарай, тип аңлаталар. Был дөрөҫмө?**

- Юҡ, әлбиттә. Йәйге айҙар фәҡәт июнь, июль һәм август. Сентябрь ҙә ял итеү өсөн һәйбәт ай, ләкин был йәй түгел инде. Шул ыңғайҙан әйтергә кәрәк, етәксе эш мәнфәғәтенән сығып отпуск ваҡытын йылдың теләһә ҡайһы осорона һәм һеҙҙең ризалыҡтан башҡа планлаштырыу хоҡуғына эйә. Хеҙмәт кодексының 4-се бүлеге 123-сө статьяһына ярашлы, график төҙөгәндә түбәндәгеләрҙең: 18 йәшкә етмәгәндәрҙең; декрет отпускыһына йыйыныусы йә булмаһа декреттан һуң отпускыға китеүсе ҡатындарҙың; ҡатындары бала табыу буйынса отпускыла булған ирҙәрҙең, РФ биләмәһендәге хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашҡандарҙың теләктәре генә иҫәпкә алына.

## АЙЫРМАҺЫ ҘУР

**Мин мейессе. Төҙөүселәр бригадаһын етәкләүсе бер эшҡыуар яңыраҡ мине эшкә саҡырҙы. Хеҙмәт кенәгәмде алып килгәйнем, ул минең менән подряд килешеүе төҙөргә тәҡдим итә. Бының берәй ғилләһе юҡ микән?**

- Хеҙмәт килешеүе менән гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеү араһында бик ҙур айырма бар. Һуңғыһына ҡул ҡуйып, һеҙ үҙегеҙҙе Хеҙмәт кодексы биргән гарантияларҙан мәхрүм итәһегеҙ. Подряд килешеүе һеҙҙең эш башҡарыуығыҙ, ә эш биреүсенең аҡса түләүенә генә ҡайтып ҡала. Ә бит хеҙмәт мөнәсәбәттәрендә башҡа бик күп мәсьәләләр килеп тыуа. Мәҫәлән, эшселәр өсөн хеҙмәт хәүефһеҙлеген булдырыу мәсьәләһе бик мөһим, сөнки төҙөлөш эшендә һәр төрлө травма алыу ихтималлығы бик ҙур. Әгәр эшсе йәрәхәтләнә ҡалһа, подряд килешеүе буйынса бының өсөн бер кем дә яуаплылыҡ йөкмәмәй. Улай ғына ла түгел, әгәр был йәрәхәт эште тамамлап ҡуйырға мөмкинлек бирмәһә, аҡса ла түләнмәйәсәк. Бында эшләгән осор һеҙҙең хеҙмәт стажығыҙға ла иҫәпләнмәй, отпуск бирелмәй, больничный түләнмәй. Хеҙмәт килешеүе иһә бындай сикләүҙәргә юл ҡуймаясаҡ, эш биреүсенән хәүефһеҙ эш шарттары булдырыуҙы талап итәсәк. Әйткәндәй, гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеүҙең ҡайһы бер осраҡта хеҙмәт килешеүе тип танылыуы ла мөмкин, тик бының өсөн юллау менән йөрөргә, судлашырға һәм нервыларынды сарыф итергә тура киләсәк.

## ЭШҺЕҘГӘ - БОЛЬНИЧНЫЙ?

**Эштән сыҡҡандан һуң 30 көн дауамында ауырып киткән осраҡта больничный түләнә тип ишеттем. Был мәшғүллек үҙәгенән иҫәптән төшкәндәргә лә ҡағыламы?**

- Мәшғүллек үҙәгендә тороп, аҙаҡ иҫәптән төшөрөлгәндән һуң сирләп китеүсегә бер кем дә больничный түләмәй. Улай ғына ла түгел, эшһеҙлек буйынса иҫәптә тороусыларға ла ул түләнмәй. Һорауығыҙҙа әйтелгәнсә, больничный бары эштән сыҡҡандан һуң 30 календарь көн эсендә сирләп киткән осраҡта ғына түләнә. Ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса больничный һуңғы эш урынынан йәки РФ Страховка фондының урындағы органы тарафынан түләнә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Тоҙ ултырһа...

❖ 100 грамм һеркә эссенцияһына 2 бешмәгән йомортҡа һалырға. Йомортҡаның тышы эреп бөткәс, унын шекәрәһен алып ташлап, 30 грамм аҡ май ҡушып болғатырға. Килеп сыҡҡан майҙы ауыртҡан быуындарға һөртөргә.

❖ Картуфты йыуып, ҡабығы менән 3-5 мм ҡалынлыҡта турарға. Картуфни тиклем вағыраҡ булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Туралған 1 килограмм картуфты ҡайнап ултырған 3 литр һыуға һалып, бер сәғәт талғын утта тоҙһоҙ бешерергә. Укроп, петрушка, кинза, сельдерей һалып, 10 көн буйына көн дауамында тик ошо ризыҡты ғына бешереп ашағыҙ. Ун көндән һуң ныҡ һыҙланмай башлаясаҡһығыҙ. Был рецептты Ванга ла кәңәш иткән.

❖ Билгә һәм ҡулдарға тоҙ ултырһа. Алма һеркәһе һеңдерелгән йөн туҡыма киҫәгенә ваҡланған ладан һибеп, төнгөлөккә билгә һәм тәнгә бәйләргә.

❖ Үксәгә тоҙ йыйылһа. Баҡыр тасты йылытып, унын төбөнә йөн туҡыма һалырға. Ауырыу ошо тасҡа ул һыуығансы баҫып торһон.

❖ 4 ҡалаҡ дөгө ярмаһын 2 литр һыуға һалып, 8 сәғәткә ултыртып торорға. Һуңынан йыуып, 20 минут бешергәс, 2 стакан дөгө бутҡаһы килеп сыға. Бер стакан дөгөнө бер көндә ашап бөтөрөргә.

### Гипергидроз

❖ Ҡул устары һәм аяҡтар тирләһә, канифолде иҙеп, тирләгән урындарға һибергә, ойоҡтарға һалырға ла була. Иртән һыуыҡ һыу менән йыуырға. 2-3 тапҡыр ҡулланғандан һуң, был проблема юҡҡа сығасаҡ.

❖ Аҙна дауамында көн һайын төнгөлөккә аяҡтарға формидрон (дарыуханаларҙа һатыла) һөртөгөҙ. Эшкә барыр алдынан һөртөп, киптерһәң, тағы яҡшыраҡ.

❖ Төнгөлөккә аяҡтарҙы аш содаһы иҙмәһе менән йыуырға.

### Атеросклероз

❖ Дингеҙ кәбеҫтәһе - мотлаҡ туҡланыу рационына индерергә.

❖ Сей картуф һуты - һәр иртә ашар алдынан эсергә.

❖ Көнөнә 2-3 һарымһаҡ теше ашау файҙалы.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА*

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ



## Унынсы дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

"Урал батыр" эпосында башҡорт халҡы яҡшылыҡтың да, яманлыҡтың да ни нәмәгә килтергәнен бик яҡшы һүрәтләй. Кешеләргә һәр ваҡыт яҡшылыҡ эшләгән Урал батыр өлөшөнә матурҙарҙың матуры, аҡыллыларҙың аҡыллыһы - Һомай һәм башҡа гүзәл ҡыҙҙар төшә, улар батыр уландар үҫтерәләр. Халыҡ Урал батырҙы ҙурлай, исеме мәңгелек тау булып ҡала. Яҡшылыҡ тигән төшөнсә Урал батыр исеме менән айырылғыһыҙ булып ҡала. Хатта Шүлгәндең Айһылыуҙан тыуған улы Һаҡмар ҙа үҙ атаһынан баш тарта. Һаҡмар атаһы тураһында былай ти:

*Атам Шүлгән булғандыр,*
*Шүлгән һиңә туғандыр,*
*Дейеүҙәр менән киткәндер,*
*Аҙаҡ күп ҡан ҡойғандыр,*
*Яҡшыға дошман булғандыр.*

Шүлгән үлтерелмәй, әммә ул япа-яңғыҙ ҡала. Яңғыҙ ҡалыуҙан да ауырыраҡ яза юҡтыр. Ислам дине Яҡшы һәм Яман эштәр ҡылыусыларҙың артабанғы яҙмышын, йәки изге кешеләр менән гонаһҡа батыусыларҙың киләсәк яҙмышын икенсе төрлө - Ҡиәмәт хөкөмө менән аңлата. Ғөмүмән, төрлө диндәр был төшөнсәгә төрлө аңлатма бирә. Аңлатма ниндәй генә булмаһын, Яҡшылыҡ эшләгән кешеләрҙең изге ғәмәлдәре лә, яманлыҡҡа баҫыусыларҙың гонаһтары ла онотолмай. Ул кешенең үҙенә ниндәй юлдар менән булһа ла кире ҡайта. Ә кеше яҡшылыҡ юлын да, яманлыҡты ла үҙе һайлай. Уға көн һайын, аҙым һайын, һәр эштә һайлауҙар булып ҡына тора. Кешегә ярҙам ҡулы һуҙырғамы - күрмәмешкә һалышырғамы, дөрөҫтө һөйләргәме - алдашырғамы, дәрестә тыңлап ултырырғамы - икенсе нәмә менән шөғөлләнергәме һәм башҡалар... Ошондай һайлау алдында ҡалғанда кеше һәр ваҡыт изгелек юлынан китергә тейеш, тигән фекер ята дини тәғлимәттәрҙә.

## Унынсы дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Кеше үҙ ғүмерендә төрлө һынауҙар алдында ҡала. Яңылышып китә, хатаһын аңлай һәм төҙәлеү юлына баҫа. Ҡайһы берәүҙәр үҙ яңылышлығын бөтөнләй танымай, үҙен хаҡлы һанай һәм хаталарын ҡабатлауын дауам итә. Әммә кешенең төҙәлеү юлына баҫыуы ла, баҫмауы ла фәҡәт үҙенән генә тора. Кешегә, һин шулай эшлә, былай эшлә, тип аҡыл биреп булмай. Фәҡәт, нимә ул хаҡ юл, нимә ул яңылыш юл икәнлеген аңлатып, йүнәлеш күрһәтергә генә мөмкин. Ә ул йүнәлештәрҙең ҡайһыныһын һайлай - уның ихтыярында. "Урал батыр" эпосында Урал ағаһы Шүлгәнгә былай ти:

*Йөрәгеңдәге ҡара ҡан*
*Кибеп, ҡабат ҡыҙарһын,*
*Шунда кеше булырһың…*

Кеше үҙ етешһеҙлеген үҙтәрбиә, үҙ ихтыяры менән бөтөрә ала. Ә үҙтәрбиә менән шөғөлләнһен өсөн уға яҡшылыҡ менән яманлыҡ, әҙәп һәм әҙәпһеҙлек, тәрбиәлелек менән тәрбиәһеҙлек кеүек ҡапма-ҡаршы төшөнсәләрҙең ни икәнен аңлатырға кәрәк. Донъя диндәре был төшөнсәләрҙе төрлөсә аңлата.

## Унынсы дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Яуаплылыҡ тигән сифат бик ҡатмарлы һәм ҡыҙыҡ төшөнсә ул. Яуаплылыҡ ике төрлө була: эске яуаплылыҡ һәм тышҡы яуаплылыҡ. Халыҡта тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай, тигән мәҡәл дә шунан килеп сыҡҡан. Ҡайһы берәүҙәр кешегә күрһәтеү, кеше алдында ояттка ҡалмау, кеше ғәйепкә алмаһын, кеше һинең турала насар уйламаһын, тигән ҡараштан сығып яуаплы булырға тырыша. Әлбиттә, кеше фекере менән һәр ваҡыт иҫәпләшергә кәрәк. "Кеше булыр кешенең кешелә булыр эше", "Кешене күҙәт, үҙеңде төҙәт", тигән фәһемле мәҡәлдәре бар халҡыбыҙҙың. Әммә бөтөн яуаплылығың кеше алдында үҙеңде күрһәтеү өсөн генә булһа, был һинең яҡшы кеше булыуыңды аңлатмай. Иң мөһиме һәм иң юғары әхлаҡлылыҡ - ул һинең үҙ намыҫың алдындағы яуаплылыҡ. Әгәр һин үҙ намыҫың алдында саф булып, ошо тойғо менән йәшәйһең икән, һин, ысынлап та, азатһың.

Уҡыусыларға ысын азатлыҡтың нимә икәнлеген аңлатыу яҡшы булыр. Ысын азатлыҡ - ул эске азатлыҡ, ғазаплы хәүефхәтәрҙән, кемдер йәки нимәлер алдында һәр ваҡыт күңелеңде өйкәп йөрөгән ғәйеп тойғоһонан азат булыу. Күңел ғазабынан: һәр саҡ ҡурҡыбыраҡ йөрөүҙән /*кеше минең насар эшләгәнемде белеп ҡалыр*/, хәүефтән /*кешегә йәки тәбиғәткә ҡарата эшләгән насарлығым көфөр булып кире ҡайтмаһа ярар ине*/ һәм башҡа шундай уйҙарҙан азат булыу ғәжәп оло бәхет ул.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

**Дәүләт, ил, халыҡ яҡшы йәшәһен өсөн иң мөһиме иртәгәге көнгә ышаныс кәрәк. Һуңғы осорҙа донъяла, хатта тотош илебеҙҙә барлыҡҡа килгән билдәһеҙлек һөҙөмтәһендә халыҡ төшөнкөлөккә, өмөтһөҙөккә бирелеп китте кеүек. Былдай шарттарҙа беҙ нимә эшләргә тейешбеҙ - ошо һорауға яуапты психоаналитик, Башҡорт дәүләт университетының психология факультеты уҡытыусыһы Әлфиә Сәғит ҡыҙы БАЙРАМҒОЛОВА менән эҙләйбеҙ.**

# АСЫЛЫНДА АСЫЛМАУСЫЛАР…

## аҙашып та харап булыусылар



- Өмөтһөҙлөккә бирелеү үҙеңдең тормошоңда, киләсәгеңдә яҡтылыҡ күрмәүҙән, маҡсаттар булмауҙан килә. Өлкән, урта быуын кешеләре яҡшы хәтерләйҙер: элек барыһы ла дөйөм маҡсат менән, бер-береһе менән тулыһынса килешеп, ошо идеологияны күңеле менән ҡабул итеп, бирелеп эшләй ине. Шул уҡ ваҡытта улар ниндәйҙер һөҙөмтәләр ҙә күрҙе, әйтәйек, көткән фатирын да ала инеләр. Ул дәүерҙә барыһы ла күберәк рухи тормош менән йәшәне, матди тормошҡа табыныу булманы һәм, иң мөһиме, кеше барына ҡәнәғәт булып, киләсәгенең тағы ла яҡшыраҡ булырына ышанып йәшәне.

Совет заманы идеологияһының тағы бер көслө яғы - милләттәр дуҫлығын данлау булғандыр. Тарихтағы ил өсөн һынылышлы ваҡиғаларҙы, мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышын ғына хәтергә төшөрһәк тә, унда урыҫ халҡы ғына түгел, ә бөтөн милләттәр ҡатнашыуы һәм ошо дуҫлыҡ менән берҙәмлектең еңеп сығыуы тураһында барыбыҙ ҙа белә инек. Һуғыш тураһындағы киноларҙа ла, урыҫтарҙан тыш, башҡа милләт кешеләре лә мотлаҡ һүрәтләнә ине. Башҡа милләттәрҙе бик ныҡ күтәрмәһәләр ҙә, урыҫтар менән сағыштырып кәмһеткән кеше булманы, һәр халыҡ үҙенең мәҙәниәте, йолалары менән көслө икәнен аңлап, юғары үҫергә юл ҡуймаһалар ҙа, артыҡ аяҡ та салмайҙар ине кеүек. Шуға ла милләттәр араһында һауаланыу, өҫтөнөрәк булырға тырышыу һиҙелмәне, һәр кем үҙенең баһаһын белеп, ошо ҙур илдең терәге булыуын тойоп йәшәне.

Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланыу менән ошоларҙың барыһы ла буталды, етмәһә, хәҙер берҙән-бер бөйөк халыҡ тип урыҫ милләтен генә күтәрергә ынтылыуҙарға шаһитбыҙ. Тик бының килеп сығыуы икеле, беренсенән, бер генә милләтте күтәреү өсөн нигеҙ юҡ, ил күп милләт вәкилдәре тарафынан төҙөлгән, был бөйөклөккә күп милләттең көсө һалынған. Икенсенән, егерме йылдан ашыу ваҡыт эсендә милләттәр ауыр булһа ла үҙ аллылыҡ яулап, рухи тамырҙарын барлап өлгөрҙө, мәҙәниәтебеҙ, телебеҙҙе ҡулланыу даирәһе үҫеште. Халыҡ тап ошолар менән көслө бит. Бешеп етмәгән идеологияны тағып маташҡансы, кешенең тамыры, көсө милләтендә икәнен танып, үҫергә мөмкинлек бирһәләр, һөҙөмтәлә илебеҙ ҙә нығыныр, халыҡ дәүләткә, етәкселәргә ышаныр һәм былдай төшөнкөлөктәргә бирелеүҙәр булмаҫ ине.

Кешенең көсө - милләттә. Кешене был донъяла тотҡан, уның йәшәүен мәғәнәле иткән башҡа бер көс тә юҡ. Психологик күҙлектән ҡарағанда, туған телендә һөйләшкән кеше генә үҙен ижади, камил шәхес итеп тоя ала, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа был Ергә ижад итергә тыуғанбыҙ. Һәр ата-әсә балаһының уңышлы булыуын теләй. Ошо һәләте булһа, ул шәхес булараҡ та үҙен аса, үҙе менән ҡәнәғәт була, былдай кеше бер ҡасан да маҡсатһыҙ йәшәмәй, тормошто ярата белә, төшөнкөлөккә бирелмәй, сөнки йәшәүенең бөтә йәме үҙенең ҡулында икәнен түбәнге аң кимәлендә төшөнә.

Кемдең теле сит телдә асылып, фекерләүе икенсе телгә күсерелә, ул кеше бары тик ҡушҡанды эшләүсегә әйләнә, сөнки уның ижади һәләтен милләтен һанламаған ата-әсәһе үк баҫҡан, юҡҡа сығарған. Ә бала эҙләнә, ләкин эҙләгәнен таба алмай, ни өсөн был донъяға килгәнен, ни өсөн бер милләт булып тыуған, әммә икенсе телдә һөйләшеп йөрөгәнен дә аңлата алмай. Ошо сәбәптәр бергә йыйылып, кешене апатияға килтерә. Шуға ла һин үҙеңдең халҡың, телең менән көслөһөң, тигән милли идея үткәрелергә тейеш.

Йәмғиәттә ғаиләнең абруйын ҡайтарыу ҙа зарур, сөнки атаәсә балаһына милләттең бөтөн ҡиммәттәрен ғаилә аша биреү мөмкинлегенә эйә. Концерт-театрҙар, мәктәп, бәлки, рух тәрбиәләй алалыр, шулай ҙа балала халҡыңды яратыу, уның менән ғорурланыу тойғолары ғаиләләге милли аштар, мәҡәлдәр, әкиәттәр һ.б. аша һалына. Эске бөтөнлөктө бер нәмә менән дә боҙоп булмай. Дөрөҫ тәрбиә алған, милләтен таныған кешенең киләсәккә ышанысы ла ныҡлы була. Психолог булараҡ, был йәһәттән бөгөнгө заман йәштәрен юғары баһалайым. Уларҙың тормошҡа ҡараштары стереотиптарға, догмаларға ҡоролмаған. Йәш кеше был донъяла һайлау өсөн юлдар күп булыуын белә, эше беренсе тапҡырҙан килеп сыҡмаһа, икенсе юлы килеп сығасағын аңлай, үҙенең маҡсатына ла эҙмә-эҙлекле бара.

Бөгөн етәксе урындарҙа күпселек осраҡта элекке заман идеологияһына һаман да тоғро булған быуын кешеләре ултыра. Әлбиттә, улар йәштәрҙе күңеле менән ҡабул итеп бөтмәй, уларҙың яңыса фекерләүен оҡшатмай. Шул уҡ ваҡытта йәштәр ҙә ҡарттарҙың тәжрибәһен алырға теләмәй, сөнки уны улар яраҡһыҙ итеп күрә. Әммә был тәүге ҡарашҡа ғына шулай, өлкәндәрҙән һабаҡ, таяныс, нигеҙ итеп алырлыҡ яҡтарҙы алырға була, сөнки тәжрибә бик көслө таяу ул. Һәр ҡоролош, ул ниндәй генә камил булмаһын, идеалдарҙы яңынан ҡарап, үҙгәрештәр индереп торорға тейеш. Тормошта бөтә нәмә лә алмашынып барырға тейеш, йәшәйештә нимәлер үҫә, нимәлер ҡартая, нимәлер икенсе төрлө нәмәгә әйләнә. Ошоно ололар ҙа, йәштәр ҙә аңлаған осраҡта ғына торғонлоҡто һуғарыусы, йәмғиәтте артҡа һөйрәүсе факторҙар булмаясаҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# ЕРЕБЕҘҘЕ ҺАҠЛАУСЫ СУРА...

## Әбйәлилгә ҡайтты




**Ошо көндәрҙә Әбйәлил районы Ҡолоҡас ауылы янында тамъян ырыуының легендар Сура батырына мәрмәрҙән һәйкәл асылды.**

Билдәле булыуынса, Сура батыр халҡыбыҙҙың азатлығы өсөн көрәшкән шәхестәрҙең береһе булған. Ул башҡорттарҙан торған ғәскәре башында Ҡаҙанға яу менән баҫып килгән рус ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Тап ошо Ҡаҙан яуында ғәскәр башы, хәрби командир булыуҙы аңлатҡан "батыр" исеме ала. Артабан, рус ғәскәре Ҡаҙанды баҫып алғас, Ноғай ханлығы рус ғәскәренән ҡурҡып, Урал тарафтарындағы ерҙәрҙе ҡалдырып, Кубань яҡтарына ҡаса. Ошо буш ҡалған ерҙәргә ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар баҫып инә башлай. Сура батыр етәкселегендәге башҡорттар илбаҫарҙар менән һуғышып, был ерҙәрҙе азат итә. Был турала үҙенең "Сура батыр" исемле йыйынтығында Сура батырҙың 12-се быуын ейәне, Ҡаҙмаш урта мәктәбе директоры Рәжәп Яҡупов та яҙа. Сура батыр рухын тергеҙеүгә, уның исемен мәңгеләштереүгә күп көс һалыусыларҙың береһе ул.

Таҡташҡа әйләнеп ҡайтайыҡ. Ғәҙәттә, ниндәй ҙә булһа берәй һәйкәлгә ҡапланған ябыуҙы ошо субъекты өйрәнеүгә иң тос өлөш индергән кешеләр аса. Был юлы һәйкәлде асыу хоҡуғы хаҡлы рәүештә Сура батыр шәхесен ауыҙ-тел ижады өлгөләренән ентекле өйрәнгән ғалим - Әхмәт Сөләймәновҡа һәм мәрмәр таҡташ ҡуйыу идеяһын тормошҡа ашырған йәмәғәт эшмәкәре, Әбйәлил башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Мирхәт Рәжәповҡа бирелде. Әхмәт Сөләймәнов үҙ сығышында батырҙар, изге кешеләр, билдәле шәхестәр йөрөгән урындарҙы белеүсе кешеләр иҫән саҡта был урындарҙы нисек тә булһа билдәләп ҡуйырға кәрәклеге хаҡында әйтеп үтте:

- Ниндәйҙер ҡиммәтле таштарҙан эшләнгән, йәки тимерҙән ҡойолған һәйкәл өмөт итмәйенсә, тәбиғи һуйырташты алығыҙ ҙа, яҙығыҙ, билдәләп ҡуйығыҙ, аҙаҡтан килер быуын араһында шәфҡәтле, игелекле, бай кешеләр осрар, улар һәйкәлдең материалын ҡиммәтлерәгенә алмаштырыр. Һуңғы ваҡытта элекке онотола биргән, халыҡ хәтерендә һаҡланған шәхестәрҙең иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла. Баймаҡ районы Буранбай ауылында - Буранбай сәсәнгә, Әминдә Брагинға ҡаршы яуҙа ҡатнашҡан Әмин батырға, Брагинды үлтергән Сураш мәргәнгә лә, Көйөргәҙе районында Кинйә абыҙ менән Мишәүле Ҡарағужаҡ бейгә һ.б. асылды һәйкәлдәр. Баймаҡ районы энтузиастары, "Урал батыр" эпосын яҙҙырған Хәмит Әлмөхәмәтовтың туғандары, бер һуйырташҡа: "Ошо урында Мөхәмәтша Буранғолов Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙән Урал батыр эпосын яҙып алған", - тип, ырып яҙғандар ҙа, уны көртәләп, билдәләп ҡуйғандар. Киләсәктә был таш урынында ҡойолма һәйкәлдәр ҙә ҡалҡып сығыр, тигән ышаныста улар, - тип, сараға килеүселәрҙе дәртләндерҙе ғалим.

Әбйәлил халҡы Сура батыр йөрөгән, батырҙың исеме менән аталған урындарҙың атамаларын бөгөн дә бик яҡшы белә. Кинтуғай тигән туғайҙа Оҙонгисеү тигән кисеүҙән 100 метр арыраҡ Сура батыр һуғышҡан ерҙәр бар. Уларҙы халыҡ Сурнай тауы тип йөрөтә. Был тауҙың башына сигнал усаҡтары яғып, башҡаларға дошман килеүен белдерер булғандар. Сурнай шишмәһе, Сураса ҡҡан шишмәһе лә бар был тирәлә. Легенда буйынса, Сура батыр ат менән сабып үткән ерҙән шишмә ағып сыҡҡан. Сура батыр ҡарауыл ҡуйҙырған Оло Таш тип аталған Ирәндек түбәһендә батырҙың даими ҡарауылы һаҡта торған. Тағы ла, ҡарауылда торған яугирҙарҙың махсус шифрлы аралашыуы һөҙөмтәһендә Тамаҡҡыр түбәһе атамаһы беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Дошман яҡынлаша башлаһа, ҡарауылдағы егеттәр тамаҡ ҡырып, башҡаларҙы иҫкәртер булған, тигән һүҙ йөрөй. Тарихи атамаларҙы телгә алыу менән XVI быуатта барған ваҡиғалар күҙ алдына баҫа. Бына ниңәһе менән ҡәҙерле халыҡ хәтере.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сура батыр тураһында беҙ әлләни күп белмәйбеҙ икән. Белгәндәребеҙ ҙә уны әкиәт батыры итеп кенә ҡабул итә. Һәр хәлдә, беҙ әбйәлилдәрҙән Сура батыр тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ишетеп ҡайттыҡ. Быныһы - бер. Икенсенән, бөгөнгө заманда ла Әбйәлил районы халҡы үҙ ерҙәренә баҫып килеүсе сит кешеләр урҙаһына ҡаршы көрәшеп йәшәй. Әммә бер көрәштә әбйәлилдәргә бер түгел, ике ҡаршылыҡҡа ҡаршы торорға тура килә. Тәүге ҡаршылыҡ - ситтән килеүселәр булһа, икенсеһе - бер көнлөк килемде генә уйлап, үҙенең ерен һатыуға йөрьәт иткән яҡташтары. Улар күп түгел, әммә осрай. Был хаҡта районда үткән Әбйәлил башҡорттары ҡоролтайы ултырышында район хакимиәте башлығы Рим Һатыбал улы Сынғыҙов үҙе хәбәр итте. Ҡасандыр тап ошо Әбйәлил районы ерҙәрен баҫҡынсылар ҡулынан азат итеп, ҡорбан булған Сура батыр рухы тергеҙелә башлауы был төбәк башҡорттарының йән ауазы сағылышы түгелме икән?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ШУНДАЙ ТӘҠДИМ*

# ХАТАЛАРҘЫ...

## төҙәтергә кәрәк

**Башҡортостан майҙаны буйынса Рәсәй субъекттары араһында 12-се урында тора, йәғни дөйөм территорияның 0,84 процентын биләй. Республиканың РФ-ның алты субъекты менән тышҡы сиге 3260 километр тәшкил итә. Ошо ҙур территорияла 4530 ауыл биләмәһе урынлашҡан.**

1997 йылдың 26 ноябрендә Өфөлә беренсе тапҡыр Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль ҡоролошон камиллаштырыу проблемалары буйынса ғилми-ғәмәли конференция уҙғарылды. Унда БР Ер ресурстары һәм ер ҡоролошо дәүләт комитетына, РФ өлкәләре һәм республикалары менән сиктәрҙең торошон ентекле тикшереп, уларҙы тәртипкә килтереү буйынса БР-ҙың юғары власть органдарына тәҡдимдәр индереү бурысы йөкмәтелгәйне. Шул уҡ ваҡытта районлар, ҡалалар, ауыл биләмәләре сиктәрен законға һәм башҡа хоҡуҡи норматив акттарға тап килтереү, булмаған урындарҙа сик билдәләрен тергеҙеү һәм яңыларын ҡуйыу, БР Президенты ҡарамағындағы Терминология комиссияһына административ-территориаль берәмектәрҙең, ауыл биләмәләренең атамаларында сағылдырыу маҡсатында рекомендациялар әҙерләү өсөн Башҡортостандың тарихи топонимикаһын өйрәнеүҙе дауам итеү тәҡдим ителгәйне. Мин ул ваҡытта Башҡортостан ауылдары атамаларындағы ҡайһы бер хаталарҙы төҙәтеү юлдарын күрһәткәйнем. Әммә бер ниндәй ҙә реакция булманы. Ләкин бындай хаталарҙы төҙәтеү һәм уларҙы тәртипкә килтереү бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ.

I. Ауыл атамаларының бер төрлө булыуы Башҡортостандың 28 районында осрай һәм был көндәлек тормошта, почта-телеграф, белешмә биреү хеҙмәтенә, уның үткәне һәм бөгөнгөһөн тикшереү менән шөғөлләнгән граждандарға һәм тикшеренеүселәргә бик күп ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Республикала бындай ауылдар 150. Бер төрлө атамалы ауылдар түбәндәге райондарҙа өс тапҡыр осрай:

Әлшәйҙә - *Михайловка* ауылы; Благовещенскиҙа - *Александровка*; Иглиндә - *Ленинский* ҡасабаһы; Күгәрсендә - *Дәүләтҡол, Юлдыбай*; Өфө районында - *Волково.*

Түбәндәге атамалар иһә бер районда ике тапҡыр осрай:

Әлшәйҙә: *Алдар, Воздвиженка, Ҡайраҡлы, Слаҡ*; Ауырғазыла: *Алексеевка, Белогорский, Березовка, Красный Восток, Михайловка, Николаевка, Усман, Шишмә, Сулпан*; Баймаҡта: *Баймырҙа, Төркмән, Моҡас, Эткол*; Баҡалыла: *Ҡамай, Михайловка, Петрово*; Бишбүләктә: *Петровка, Степановка, Алексеевка*; Бөрөлә: *Шишмә*; Благовещенскиҙа: *Аркауыл, Дмитриевка, Николаевка, Троицкий*; Ғафуриҙа: *Ивановка, Дмитриевка*; Дәүләкәндә: *Алға*; Иглиндә: *Каменский, Кировский, Кузнецовский, Кузнецовка, Ленинский, Октябрьский, Пятилетка*; Илештә: *Бүләк, Восток, Гремучий Ключ*; Ишембайҙа: *Михайловка*; Ҡариҙелдә: *Аркауыл*; Ҡырмыҫҡалыла: *Александровка, Николаевка*; Краснокамала: *Таҡталасыҡ*; Көйөргәҙелә: *Покровка*; Мәләүеҙҙә: *Александровка, Дмитриевка*; Мишкәлә: *Михайловка*; Миәкәлә: *Алексеевка, Новониколаевка*; Стәрлетамаҡта: *Николаевка, Покровка*; Тәтешледә: *Әрбиш*; Туймазыла: *Алексеевка, Туҡмаҡ-Ҡаран*; Өфөлә: *Көсөк, Мулдаш*; Федоровкала: *Ильиновка, Покровка*; Шишмәлә: *Боголювка, Дмитриевка, Шишмә*; Шаранда: *Папановка*; Янауылда: *Андреевка.*

Ауылдарҙың атамалары борондан, ниндәйҙер тарихҡа бәйле барлыҡҡа килгән. Шуға бер төрлө атамалы ауылдарҙың атамаһын үҙгәртеү - мәсьәләне хәл итеү юлы түгел. Мин уларҙың береһенә географик ориентир-топонимдарҙы (гидроним, уроним), шулай уҡ антропонимдарҙы, йәғни уларға нигеҙ һалыусыларҙың исемдәрен өҫтәргә тәҡдим итәм. Мәҫәлән, Мулдаш ауылының береһен Мулдаш-Үрген (ауыл эргәһендәге күл, Учалы районы); Төркмән ауылының береһен Төркмән-Йәнсәйет (Төркмәндең фамилияһы буйынса, Баймаҡ районы) һ. б. тип атарға мөмкин.

II. Бер үк ауыл атамаһының яҙылышын берҙәм нормаға килтерергә. Мәҫәлән, Әлшәй һәм Бәләбәй районында *Ташкисеү* ауылы бар, ә Туймазыла - *Таш-Кисеү*. Йәки Илештә *Ташшишмә*, Шаранда - *Таш-шишмә.*

III. Атамаһы булмаған ауылдарға атама бирергә, хәйер, бында үҙгәрештәр бар.

IV. Ауыл атамаларында, гидронимдарҙа (географик номенклатура) ебәрелгән хаталарҙы төҙәтеү талап ителә. Бындай хаталар бик күп. Миҫалға бер-нисәһен генә атап китәм:

- *Әмән ауылы* (Һәмән) - рәсми рәүештә Семән (Семенево, Баймаҡ районы) тип атала;
- *Әлибай* (Алибай) - Әлбәй (Альбеево, Шишмә районы);
- *Бала-ҡатай* - Белокатай;
- *Урғаҙа йылғаһы* - Уртазымка (Баймаҡ районы);
- *Төйәләҫ йылғаһы* - Худолаз (Баймаҡ районы) һ.б.

V. Ер йөҙөнән юғалған ауылдарҙың атамаһын, Белоруссиялағы һәм Украиналағы кеүек, уларҙың урынына иҫтәлекле билдәләр, таҡтаташтар ҡуйып һаҡларға кәрәк.

VI. БР-ҙың элекке һәм хәҙерге билдәле шәхестәренең исемен республика ауылдарына биреп мәңгеләштерергә.

VII. Район һәм ҡала хакимиәттәре ярҙамында БР ауылдарының тарихы буйынса брошюралар ижад итеп, халыҡтың тарихи хәтерен тергеҙеү өстөндә эш алып барыуҙы ла оноторға ярамай.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

✓ *Ғөмүмән, беҙҙең ауылда бер ҡасан да дин бөтмәне, шуға халыҡ тәрбиәле ине. Совет осоронда ла мәсет манараһы үҙ урынында ултырҙы, уға теймәнеләр. Тәрбиә лә көслө булғандыр.*



**Гәзитебеҙ ошо ун йыл осоронда әллә күпме тоғро дуҫтар тапты, яңы исемдәр асты. Шуларҙың береһе Әбйәлил районында йәшәүсе Әнүәрә апай ХӘЙБУЛЛИНА уҡыусыларыбыҙға яҡшы таныш. Ул "Халыҡ дауаһы" рубрикаһына яҙыша, "Ағинәй һүҙе" менән уртаҡлаша, "Алдар менән Ерәнсә ҡоро"н Әбйәлил мәҙәктәре менән байыта. Ғүмере буйына мәктәптә балаларға башҡорт теле серҙәрен өйрәткән һәм әлеге мәлдә хаҡлы ялда булған Әнүәрә Ғәбделхаҡ ҡыҙы был юлы баш ҡалабыҙ Өфөгә, "Киске Өфө" гәзитенә һәм бөгөнгө заманға мөнәсәбәте, хәтирәләре менән уртаҡлаша.**

# Һәр көнөңдән йәм табып,
## башҡаларға кәрәкле булып йәшә



*Хәҙер улай түгел, уҡытыусының һүҙен ҡабул итмәйенсә, балаһынан алда ата-әсәһе сыпраңлап сыға. Урамда берәй балаға иҫкәртеү яһап ҡара әле, минең баламда ни эшең бар, тип кенә ауыҙыңды ябып ҡуялар. Ошондай ҡурсалау, яҡлау, бәпләү баланы боҙа ғына бит инде ул. Тәрбиә халыҡ педагогикаһынан бөтөнләй ситләште шул хәҙер. Шуға ла үҫеп килгән быуындың тәрбиә ғәмәлдәре икенсе. Бәләкәй балаларға әкиәт һөйләмәйбеҙ, йырҙар йырламайбыҙ.Ололарҙы ололау, хөрмәт итеү, уларҙан тартыныу тигән нәмә бөттө. Әсә ҡорһағында уҡ спиртлы эсемлектәр, теләһә ниндәй насар һүҙҙәр менән ағыуланған, хәләл булмаған ризыҡ ауыҙлаған быуын үҫеп килә. Быларҙың барыһы ла иман булмауҙан да киләлер инде.*

### Өфө һағындыра…

Минең өсөн Өфө үтә ҡәҙерле ҡала, иң яҡты хәтирәләрем уның менән бәйле. Баш ҡалаға беренсе тапҡыр 1949 йылда аяҡ баҫтым. Иптәш ҡыҙым менән бөгөн Рәми Ғарипов исемен йөрөтөүсе 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға инергә тип килгәйнек. Директорға инһәк, һынауҙар үтте, уҡыусылар тулды, башҡа урын юҡ, ти. Бер аҙ ни эшләргә белмәй баҫып торҙом да: "Беҙҙең ауылға ҡайтырға аҡсабыҙ юҡ", - тип өҙөп әйткән булып, директорҙың алдына икебеҙҙең дә документты сығарып һалдым да, ағайҙың яуабын да көтмәй, ишеккә йүнәлдем. Иптәш ҡыҙым да минең арттан сыҡты. Сыҡтыҡ та, артабан ни эшләргә белмәй, коридорҙағы эскәмйәгә ҡунаҡланыҡ. Шул саҡ яныбыҙға бер ағай килде һәм: "Ҡыҙҙар, нимә эшләп ултыраһығыҙ бында?"- тип һораны. Беҙ иламһырап ҡына хәлебеҙҙе аңлатып бирҙек. "Мин хәҙер министрлыҡҡа барам, әйҙәгеҙ минең менән, унда һөйләшеп ҡарағыҙ", - тип, ул беҙҙе үҙе менән алып китте. Был ағайҙың Шакир Янбаев икәнен һуңынан ғына белдем. Министрлыҡтан "Һынауҙарҙы үтһәләр, уҡырға алығыҙ", тигән күрһәтмә тотоп, яңынан килдек интернатҡа. Һынауҙарҙы тапшырып, уҡып алып киттек шулай.

### Рәми Ғарипов менән танышыу

Интернатта иң тәүге танышҡан кешем Рәми Ғарипов булды. Бәләкәйҙән ҡыҙыҡһыныусан булдым, был юлы ла шул холҡомдо ҡуймай, интернат менән танышып йөрөйөм. Ашхананың иң төпкөлөндәге бүлмәлә бер ҡосаҡ китаптарға күмелеп, бер малай нимәлер яҙып ултыра. "Ағай, бынау китаптарҙы уҡырға яраймы?" тип өндәштем тегегә. "Ярай", тине малай башын күтәрмәй генә. Өҫкө ҡатҡа менеп, китаптарға күмелеп уҡып ултырған малай тураһында ҡыҙҙарға һөйләһәм: "Ул ниндәй малай булһын, ул - бабай", - тинеләр миңә. Ысынлап та, интернаттағыларҙың уға исеме менән, Рәми, тип өндәшкәнен бөтөнләй хәтерләмәйем, беҙҙең барыбыҙ өсөн дә ул "Бабай" ине.

Концерттар ваҡытында Рәми шиғыр уҡый, Рафаэль Сафин менән Бәхти Ғайсин ағайҙар музыка инструменттарында уйнай. Рәми Ғарипов менән бер класта уҡыған Диҡҡәт Бураҡаев та беҙҙең өсөн оло ағай һымаҡ ине. Ниндәй генә һорау килеп сыҡһа ла, унан кәңәш һорар инек. Ул аяҡ осона ҡарап, уйланып торор ҙа, күҙҙәренән осҡондар сәсеп: "Ошолай эшләһәң, нисек булыр икән?"- тип, үҙенең фекерен белгертер, үҙеңә лә уйларға, баш ватырға урын ҡалдырыр ине. Уның шулай уҡ: "Ҡасан ғына, ҡайҙа ғына осрашһаҡ та, күҙ ҡараштарыбыҙҙан интернат-мәктәптә уҡығаныбыҙҙы белгертергә, аңғартырға тейешбеҙ", - тигән һүҙҙәре ҡолағымда гел сыңлап тора. Бигерәк аҡыллы булған инде элек ирегеттәр. Ә ниңә хәҙер улай түгелдәр?

### Араларҙы бәйләй

Беҙ мәктәп-интернатта уҡыған ваҡытта әлеге Өфөнөң үҙәге ҡола ялан ине әле. Күмәкләп трамвайға тейәлеп, водителгә арабыҙҙан беребеҙҙе вожатый тип алдап таныштырабыҙ ҙа, бар ҡаланы урап сыға торғайныҡ. Өфөнөң беҙ күрмәгән, беҙ баҫмаған ере ҡалмағандыр ул саҡта. Өфө, бергә уҡыған һабаҡташтарым тураһында бына ошондай йылы хәтирәләр һаҡлайым күңелемдә. Хәҙер, олоғайғас, әллә ни йыш йөрөп булмай ауылдан сығып, шуға ла минең Өфөнө һағыныуымды, танһығымды "Киске Өфө" гәзите ҡандыра. Уны уҡып, баш ҡаланың ғына түгел, тотош республикамдың хәлен белеп торам. Ошо гәзит мине ултыраҡ тормошҡа өйрәтте, тип шаяртып та алам. Бабайым, унан һуң бер-бер артлы кейәүем менән ҡыҙым мәрхүм булғас, өйҙә бөтөнләй толҡа тапманым. Сығам да китәм ил гиҙергә. Баймаҡ яҡтарын йөрөп сыҡтым, Миндәк яҡтары ла ҡалманы, Ғафуриға ла барып еттем. Йөрөй торғас, кешеләрҙең йәшәйешенә, көнитмешенә, йорттарына иғтибар итә башланым. Шунан ғына өйөмдөң эсенә ҡатын-ҡыҙ ҡулы тейҙе. Йөрөүем дә һәйбәт булған, күпме кешеләрҙе, күпме ерҙәрҙе күрҙем, күңелем үҙ урынына ултырҙы.

"Киске Өфө"нөң яҙыу алымын яратам, бигерәк йомшаҡ, йөрәккә май булып яғыла. Шуға ла был гәзит телен балалар ҙа, оло кешеләр ҙә аңлай. Тормоштоң бөтөн яғын үҙ эсенә алыуы оҡшай. Ҡайһы берҙә үҙем дә яҙышып ебәрәм, күңелемдәген кешеләргә өйрәтеп ҡалайым, тием. Гәзиткә аҙна һайын хат яҙам да, почтаға алып барам. Почта йыраҡ булмаһа ла, бер сәғәт барам, сәғәт ярым ҡайтам, сөнки юлда кеше менән аралашып барам, уларҙы тыңлайым, һораһалар, кәңәш бирәм. Бына шулай үҙемсә гөр килеп йәшәйем "Киске Өфө"нөң хәбәрсеһе булып.

### Беҙҙең абруй ҙур ине

Мәктәптә уҡыған саҡта табип булырға әҙерләнгәйнем, әммә әсәйем риза булманы. Ризалыҡ бирмәйем, тигәс, Стәрлетамаҡ педагогия институтына инеп, уҡытыусы һөнәрен үҙләштерҙем. Уҡыған саҡта курсташым, Әбйәлил егете Әнүәргә кейәүгә сыҡтым.

Ул ваҡытта партия ҡайҙа ҡуша, шунда эшкә бара инек бит. Беҙ ҙә тәүҙә Баймаҡ районының Өмөтбай, Билал ауылдарында, һуңынан Әбйәлилдең Хәлил, Ишҡол ауылдарында уҡыттыҡ. Ғүмер үткән дә киткән, Байымға күсеп килгәнгә генә быйыл 40 йыл тулды. Уҡытыусының уҡыусылары күп булғас, ҡайҙа барма, ҡаршы алып торалар, ҡунаҡ итәләр. Төрлө яҡтан сәләмдәр ҙә, күстәнәстәр ҙә килеп кенә тора. Бына әле генә Яҡутиянан шәл менән сәй килеп төштө. Былтыр шулай бер ҡыҙыҡ хәл булғайны. Ауылдашым миңә бер һауыт көнбағыш майы тотоп килеп инде: "Бер уҡыусың осраны, майҙан башҡа нәмә юҡ ҡул аҫтында, май булһа ла алып барып биреп, сәләм әйт", - тине, ти. Бына шулай, уҡыусыларым хөрмәтләп иҫкә алып торалар.

Хәҙер уҡытыусыларҙың абруйы булмауы эсемде бошора. Элек бит уҡытыусы һөнәре шул тиклем хөрмәтле булды, уҡытыуҙан тыш, күпме йәмәғәт эштәре башҡара инек. Мине әсәйем мәктәпкә уҡырға алып барғанда уҡытыусыма шулай тигәйне: "Ите - һиңә, һөйәге миңә". Ул һүҙҙәрҙе әле лә хәтерләйем. Минең үҙемдең уҡыусыларымдың ата-әсәләре лә балаларын миңә тулыһынса ышанып тапшыра ине. Хәҙер улай түгел, уҡытыусының һүҙен ҡабул итмәйенсә, балаһынан алда ата-әсәһе сыпраңлап сыға. Урамда берәй балаға иҫкәртеү яһап ҡара әле, минең баламда ни эшең бар, тип кенә ауыҙыңды ябып ҡуялар. Ошондай ҡурсалау, яҡлау, бәпләү баланы боҙа ғына бит инде ул.

Тәрбиә халыҡ педагогикаһынан бөтөнләй ситләште шул хәҙер. Шуға ла үҫеп килгән быуындың тәрбиә ғәмәлдәре икенсе. Бәләкәй балаларға әкиәт һөйләмәйбеҙ, йырҙар йырламайбыҙ.Ололарҙы ололау, хөрмәт итеү, уларҙан тартыныу тигән нәмә бөттө. Әсә ҡорһағында уҡ спиртлы эсемлектәр, теләһә ниндәй насар һүҙҙәр менән ағыуланған, хәләл булмаған ризыҡ ауыҙлаған быуын үҫеп килә. Быларҙың барыһы ла иман булмауҙан да киләлер инде.

### Заман да, тәрбиә лә үҙгәрә

Мин Күгәрсен районы Үрге Биҡҡужа ауылында тыуып үҫтем. Өләсәйем дә, әсәйем дә үлән, доғалар менән кешеләрҙе дауалай, тәбиғәт менән дуҫ ине. Өләсәйем заманына күрә бик белемле булған, әсәйемде, башҡа туғандарын да уҡытҡан, сөнки беҙҙең зат-нәҫелебеҙҙә муллалар ҙа, мәзин дә булған. Олатайҙың әсәһе - ҡарт өләсәй беҙҙең менән йәшәне, ул им-томға ла һәләтле ине. Атайым да уҡымышлы кеше ине, китаптар алып ҡайтыуын, ҡышҡыһын ауыл халҡының беҙҙең өйгә шул китаптарҙы уҡығанды тыңларға йөрөгәнен хәтерләйем. Ғөмүмән, беҙҙең ауылда бер ҡасан да дин бөтмәне, шуға халыҡ тәрбиәле ине. Совет осоронда ла мәсет манараһы үҙ урынында ултырҙы, уға теймәнеләр. Тәрбиә лә көслө булғандыр. Бала-саға урамда берәй ағасты һындырһын йә берәй ҡошҡортҡа зыян килтерһен - ололар йыйылып, шунда уҡ аҡылға ултырта инеләр. Тәбиғәтте шул тиклем һаҡлай торғайнылар, хатта күгәрсенгә лә тейҙермәнеләр. Урман ҡарауылсылары ла кәкере йә ҡороған ағасты ғына ҡырҡтырҙылар. Бына хәҙер һыуға ла, урманға ла ҡараш шул тиклем насар. Былар тейешле тәрбиә булмауынан, ағинәйҙәрҙең, аҡһаҡалдарҙың һүҙе, күҙәтеү-контроле булмауҙан килә.

Бәләкәй саҡта һыу инергә китергә йыйынғанды күрһә, өләсәй:"Һыуға бысраҡ ташлама, кәрәкмәгәнгә балыҡтарға теймә",- тип, ҡырҡ ерҙән тыйып ебәрер ине. Ауылыбыҙҙа башҡорттар, урыҫтар, сыуаштар, татарҙар йәшәне, ошо дүрт милләт татыу итеп, берберенең йолаларын һанлап көн күрҙе. Тәбиғәткә ҡараш та тигеҙ ине. Хәҙер бына беҙ, Әбйәлил халҡы, Магнит ҡалаһы кешеләренән йонсойбоҙ, уларға һинең тәбиғәтең ни ҙә, йәнлегең ни. Ерәндә кәрәгенсә ҡулланып, бысрата ла, китеп тә баралар. Һәр ауыл янындағы урманда улар тарафынан ҡоролған кәйеф-сафа урындары күбәйҙе, уларҙан һуң ятып ҡалған сүп-сар, бысраҡ һуң! Күңел асып ҡына йәшәргә күнекте халыҡ. Беҙҙең күл буйҙарындағы ял йорттары урындағы халыҡҡа эш бирә, тигән булабыҙ ҙа ул, ләкин беҙҙең халыҡ ана шул ни ер ҡәҙерен, ни тәбиғәт ҡәҙерен белмәгәндәргә тамаҡ байына хеҙмәтсе булып ҡына йөрөп ғүмерен үткәрә хәҙер. Үҙ еребеҙҙә ни түрә, ни хужа була белмәгәс, көнөбөҙ шул хеҙмәтселеккә генә тороп ҡалды инде.

### Йәнлектәр ҙә үҙгәрҙе

Кешеләрҙең күңеле ҡатыланды, аяуһыҙланды, шуға йән әрней. Кешеләргә эйәреп, уның әйләнә-тирәһе, тәбиғәт, йәнлектәр ҙә үҙгәрә. Элек йәнлектәр ауылдың янында ғына йөрөр, әммә кешегә зыян килтермәҫ ине. Бер тапҡыр шулай Алексей бабайҙың умарталарынан төн һайын бер бал рамы юҡ була икән. Аңдып ҡараһа, урмандан айыу сыға ла, иплән кенә умартаның өҫтөн асып, рамды ала һәм кире ябып ҡуйып, шым ғына йылғаға төшә икән. Кәрәҙле рамға йәбешкән ҡорттарҙы йылғала йыуып төшөрә лә урманға инеп китә, ти. Шулай бер тапҡыр атайым менән ағайым балыҡҡа мурҙа һалдылар. Бер барҙылар, ике барҙылар, яр ситендә мурҙа ята, балыҡ юҡ, ти. Аңдып ҡараһалар, ҡояш сығыуға ғына ике балаһын эйәртеп айыу килеп төшә лә, һыуҙан мурҙаны сығарып, балыҡтарын ҡырсынға түгеп, ашайҙар ҙа, урманға йүнәләләр. Бына шулай кеше менән йәнәш, кешенең көнмитмешен белеп, ул ҡәҙәре зыян итмәй генә йәшәй ине элек урман йәнлектәре. Хәҙер улар ҙа агрессивҡа әйләнде, сөнки кеше үҙе уларҙың ҡотон алып, шундайға әйләндереп бөтөрҙө. Урманда туҡланыр нәмә булмағас, малға ла тейә хәҙер улар.

### Сабыр итһәң, мораҙыңа етерһең

Табип була алмаһам да, ғүмерем буйы халыҡ медицинаһы менән ҡыҙыҡһындым. Бөгөн кешене сиргә алып килгән сәбәптәр - уларҙың сабырһыҙлығы, ҡомһоҙлоғо, нәфсеһе. Барына риза булып, "Өйөмдәге ризыҡымдың бәрәкәтен, мәнфәғәтен бирһен Аллам", тип йәшәү урынына ҡомһоҙланабыҙ. Был көнсөллөккә килтерә, көнсөллөк кешене эстән ашай, сирле итә. Етмәһә, үтә сабырһыҙ бит хәҙер әҙәм балалары. Стресс, депрессия тигән модалы атамалар килеп сыҡты.

Ни өсөн әле мин бер сиктән икенсе сиккә бәргеләнеп, үҙемдә ауырыштарға тейешмен? Шатлыҡмы ул, ауыр ҡайғымы - мин тыныс ҡабул итәм. Артыҡ шатланырға ярамай икәнен дә беләм. Йөрәк ҡайғыға ҡата, түҙә, шатлыҡҡа сыҙай алмай, ярыла. Шуға әйтелә бит "Шатлыҡ килһә, күтәреш, ҡайғы килһә, уртаҡлаш" тип. Иғтибар иткәнегеҙ бармы, ҙур шатлыҡ булғанда йөрәк күкрәккә һыймаҫтай булып тибә. Бына шуға ла, Хоҙайға рәхмәт әйтеп, бик үк ярһымай, донъяңды онотмайынса, сабыр ғына ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк бар нәмәне лә. Ураҙа тотоу, доғалар уҡыу, бисмилләңды әйтеп йөрөү ҙә тынысландыра, күңелдә таҙарта.

Кеше бер-береһенең ҡәҙерен белмәй, бер-еберенән ихтирам итмәй. Иртән торғас та эргәләге күршеләреңдең мөрйәһен ҡара, төтөнө сығамы, юҡмы? "Күршеңдең һигеҙ төрөн бел", ти халыҡ.

Йорттарыбыҙҙы ҙур итеп төҙәйбеҙ, ә күңелебеҙ тарая бара. Ҙур йорт, тигәндәй, бына хәҙер тәҙрәләрҙе саманан тыш ҙур итеп уялар, ә тәҙрә аша өйҙәге яҡшы энергия һурылып сығып тороуын белмәйҙәр. Бына ни өсөн борон тәҙрәләр бәләкәй булған. Ҡытайҙар быны әле лә белә. Элек кәштәләр, өҫтәлдәрҙең мөйөштәре булмай торғайны, улар ҙа насар энергия сығанағы.

Туҡланыуыбыҙға ла иғтибар итмәйбеҙ. Әҙергә, магазинға йүгергән булабыҙ, ә был ризыҡтар йышыраҡ ауырыуға килтерә. Һөт-ҡатыҡтан ғына күпме ризыҡ әҙерләргә була. Бәләкәй саҡта беҙ сәйҙе лә үҙебеҙ яһай инек әле. Күмәкләшеп сығып китәбеҙ үлән йыйырға, ололар уларҙың атамаһын әйтеп, күрһәтеп бара, беҙ йыябыҙ. Кәрәгенсә эшкәртеп алғас, соланға тоҡ-тоҡ итеп элеп ҡуя инек. Элек халыҡ үлән ризыҡтарын да күп ашаны, шуға ауырып барманы. Шифаһын белһән, сырмалсыҡ менән алабута ла дауа ул...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Картайһаң, ҡыҙыҡ икән ул", тигәйне Әнүәрә Ғәбделхаҡ ҡыҙы һөйләшкән саҡта. Уның кеүек, һәр көнөңдән йәм табып, башҡаларға кәрәкле кеше булып йәшәй белһәң, ғүмереңдең һәр миҙгеле матурҙыр инде ул. Һуҙ аҙағында гәзит уҡыусыларға Әнүәрә апайҙан тағы бер кәңәш: "Әле урамда көҙ, тик уның матур, йылы мәле үтте, тип, өйҙә генә ултырмағыҙ. Көҙгө һауа саф, таҙа була. Күберәк тын алығыҙ, урманға сығығыҙ ҙа, таш, ағас "йотоғоҙ". Тик хәҙер ағасты ҡосаҡларға ярамай. Япраҡ ҡойолһа, ул ҡышҡа әҙерләнеп, иң эстәге кәрәкмәгән нәмәләрен ҡабыҡ аҫтына сығара, шулай итеп һыуыҡтан һаҡлана - өләсәй беҙгә шулай, тип өйрәтә ине. Һәм, әлбиттә, гел сәләмәт булығыҙ".**

Ләйсән НАФИҠОВА
яҙып алды.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ТАТЫУ ҒАИЛӘЛӘР...

## ил күрке һәм өмөтө

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Конгресс-холл бинаһында үткән "Йәш ғаилә-2012" конкурсының йомғаҡлау өлөшөн тамаша ҡылып, республикабыҙҙа рухлы, татыу, ижади йәш ғаиләләр күплегенә тағы бер ҡат инандыҡ. Быйыл конкурста ҡатнашырға бөтәһе 24 ғаилә теләк белдерә. Йомғаҡлау өлөштә сығыш яһау уларҙың һигеҙенә генә насип булды.**



Юлай Кәримов фотоһы.

Бына тамашасыларын, көйәрмәндәрен һөйөндөрөп, бәләкәс балаларын етәкләп, Өфөнән Дим районынан Олеся һәм Михаил Васильевтар сәхнәгә сыҡты. Уларҙың сығышынан барыһы ла шуны аңланы: был ғаиләлә әсәй кеше аш-һыу яраштыра, тәртип ойоштора, атай өйҙә төҙөкләндерә, ҡыҫҡаһы, кескәй Давид менән Есенияның бәхетле бала сағы, яҡты киләсәге өсөн барыһы лә эшләнә, ғаиләлә тик мөхәббәт кенә хөкөм һөрә.

Йылайыр районынан килгән Зарифа һәм Фаил Юламановтарҙың ғаиләһендә рухлы, талантлы ике батыр тәрбиәләнә. Малайҙарҙың "Беҙ - Салауат вариҫтары, беҙ - илдең киләсәге, сит-яттарҙан тапатмабыҙ илебеҙ гөл-сәскәһен!" тип йырлауы бөтә залды дәртләндереп, күтәреп ебәрҙе.

Конкурста ҡатнашыусы бар ғаиләләрҙә лә балаларҙың талантын үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленеүе ап-асыҡ булып тәҫмөрләнде. Мәсәлән, Давид Васильев моңло итеп флейтала уйнаны, Айдемир һәм Алимхан Мөхәмәтйәровтар "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө менән берлектә йыр башҡарҙы. Әммә бөтә бәйгене йәмләндергән, уның мәғәнәһен асып биргән өлөш - "Ғаилә байрамдары һәм йолалары" номинацияһы булды. Өфө ҡалаһынан Әлиә менән Әлмир Мөхәмәтйәровтар балалары, яҡындары, дуҫтары менән бергәләп башҡорт һабантуйын һынландырҙы. Был сәхнә күренеше милли байрамдарыбыҙҙың күңелгә ятышлы, эскерһеҙ һәм дәртле булыуын, уларҙың нигеҙендә таһыллыҡҡа, етеҙлеккә һынау ятыуын тағы бер тапҡыр раҫланы.

Дүртөйлө районынан килгән Альбина һәм Шамил Ялаевтар "Шәжәрә байрамы" сәхнәһен күрһәтте. Ғаилә башлыҡы күптән инде үҙенең тамырҙары менән ҡыҙыҡһыныуын, йәйләп ҡына шәжәрәһен тулыландыра барыуын, балаларына ете быуын ата-бабаларын таныттырыуын ихлас бәйән итте. Уларға ҡарап, йәш ғаиләләрҙә тарихҡа, үткәндәргә ҡыҙыҡһыныу арта барыуын күреп һөйөндөк.

Конкурста ҡатнашҡан төрлө милләт вәкилдәре милли кейемдәрҙә, үҙ туған телендә сығыш яһаны. Бәләбәй районынан Денис һәм Лиана Федотовтар "Пасха" байрамы нисек үтеүен генә түгел, ә сыуаш ҡатын-ҡыҙҙарының милли баш кейеменең төрҙәре тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирҙе. Баҡтиһән, тухья тип аталған осло башлы баш кейемен кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар кейә, был уларҙың Һауа менән бәйләнештә булыуын аңлата икән. Ҡатындар өсөн Ергә яҡын булғанлыҡтарын сағылдырыусы түбәһе тигеҙ итеп тегелгән хушпу тәғәйенләнгән. Һәр милләттең милли кейемендәге ваҡ ҡына биҙәктәр ҙә оло мәғәнәгә эйә булыуы, ата-бабалар кейемгә тәңкә баҫҡанда ла ниндәйҙер фәлсәфә, аҡылға буйһоноп эш итеүе тураһында ла ишеттек беҙ ҡатнашыусыларҙан.

Бәйгенең һәр өлөшөнә ихлас әҙерләнгән, сәмләнеп, бар көстәрен һалып сығыш яһаған матур ғаиләләр араһынан еңеүсене билдәләү жюри ағзалары өсөн еңелдән булманы. Башҡортостан Республикаһының Спорт һәм йәштәр сәйәсәте министры Андрей Иванюта әйтеүенсә, "Йәш ғаилә" конкурсы рухи яҡтан бай, эшсән, сәләмәт тормош алып барған ғаиләләрҙе бөтә республика халҡына өлгө итеп күрһәтеү, ошондай башланғыстарҙың Хөкүмәт тарафынан хупланыуын раҫлау өсөн үткәрелә. Мәскәүҙән килгән ҡунаҡ, "Берҙәм Рәсәй" партияһы "Ныҡлы ғаилә" проекты башҡарма директоры урынбаҫары Марина Санникова "Йәш ғаилә" конкурсын бөтә Рәсәй кимәлендә үткәрергә кәрәк, тип һығымта яһаны. "Илдә ниндәй генә партия идара итмәһен, кеше ҡайһы ғына милләт вәкиле булмаһын, беҙҙең өсөн иң мөһим нәмә - ул ғаилә. Беҙ ғаилә именлеге өсөн йәшәйбеҙ, эшләйбеҙ. Бөгөн ҡарарға насип булған конкурстың йомғаҡлау өлөшө яҡты бер байрам төҫлө үтте. Мин йәш ғаиләләргә һоҡланып, илебеҙҙең киләсәгенә улар ныҡ ышанып, өмөттәремде баглап ултырҙым", - тип үҙ тәьҫораттары менән бүлеште ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өй йылыһын, ата-әсә хәстәрен сағылдырған, йылы хистәр бүләк иткән матур конкурс үҙ еңеүселәрен билдәләне. "Йәш ғаилә-2012" конкурсының иң төп еңеүсеһе итеп Өфөнөң Ленин районынан Әлиә һәм Әлмир Мөхәмәтйәровтар ғаиләһе танылды. Беренсе урын - Лиана һәм Денис Федотовтар (Бәләбәй районы), икенсе урын - Екатерина һәм Сергей Соболевтар (Нефтекама ҡалаһы), өсөнсө урын Альбина һәм Шамил Ялаевтар (Дүртөйлө районы) ғаиләләренә бирелде. "Ғаилә йолаларын ныҡытыу һәм һаҡлау", "Йондоҙло ғаилә" номинацияларында Олеся һәм Михаил Васильевтар (Өфө ҡалаһы, Дим районы) ғаиләһе билдәләнде. "Ғаилә йолаларын һаҡлау" номинацияһы Гөлшат һәм Аяз Кускилдиндарға (Ишембай ҡалаһы) бирелде , ә "Иң татыу ғаилә" тип Эльвира һәм Евгений Резвовтар (Стәрлетамаҡ ҡалаһы) ғаиләһе танылды. Зарифа һәм Фаил Юламановтар (Йылайыр районы) ҡулдарына "Милли йолаларҙы тергеҙеү өсөн" номинацияһы дипломын алды.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

*✓ Ғәшүрә көнөндә (24 ноябрь) тотолған ураҙа мосолмандың үткән һәм киләсәк йыл гонаһтарын юя. Был көндә бирелгән борсаҡтай саҙаҡа өсөн дә Аллаһы Тәғәлә Ухуд тауындай сауап бирәсәк.*






Донъяла Рух тигән ҡош бар. Башҡа бөтә ҡоштарҙан да айырмалы рәүештә, Рух ҡошо нурҙан ғына тора һәм күҙгә күренмәй. Уны бары тик күңел менән генә тойоп була.

Ер йөҙөндә йәшәгән һәр бер халыҡтың үҙ Рух ҡошо була. Һәр халыҡ үҙ Рух ҡошо менән бергә барлыҡҡа килә. Рух ҡошо халыҡтың улдарының һәм ҡыҙҙарының күңел йылылығынан көс ала. Ә күңел йылылығы халыҡтың үҙ булмышына, үҙ моңона, теленә һөйөүенән, бер-береһенә булған күңел тартымынан, киләсәк алдындағы бурыстарына яуаплылыҡ тойғоһонан ярала. Ошо йылылыҡтан көс алған Рух ҡошо иһә халыҡҡа юғарылыҡҡа, оло маҡсат менән йәшәүгә ынтылыш, саялыҡ, ғорурлыҡ, ихтыяр көсө рәүешендә рухи ҡеүәт бирә.

Әгәр халыҡ үҙ булмышына хыянат итһә, Рух ҡошоноң көсө кәмей башлай.

Үҙ теленә, моңона, ижадына һөйөүе һүрелһә, уның ғорурлығы юҡҡа сыға.

Бер-береһенә булған күңел тартымы ҡаҡшаһа, ихтыяр көсө кәмей.

Киләсәк алдындағы бурыстарын онотһа, оло маҡсат менән йәшәүгә ынтылыш та, саялыҡ та селпәрәмә килә.

Ә Рух ҡошоноң көсө кәмеһә, халыҡ хәлһеҙләнә. Хәлһеҙләнгән халыҡ үҙ Рух ҡошон йәшәтеү өсөн тейешле кимәлдә йылылыҡ бирә алмай.

Сит халыҡтар араһына сығып киткән кешеләрҙең иһә үҙ Рух ҡоштары менән күңел нурҙарының бәйләнеше бик ныҡ бушай. Шуға ла улар сит ерҙәрҙә йәшәгәндә йөрәктәрендә ниндәйҙер бушлыҡ һәм үҙәк өҙгөс һағыш тоя башлай. Йырҙарын һағынамы, тыуып-үҫкән ерҙәренме, туғандарынмы - үҙҙәре лә белмәй һәм аңламай. Ә һағыштың төп сәбәбе - үҙ халҡының Рух ҡошо менән күңел бәйләнешенең өҙөлөүе. Ситкә күмәкләп сығып китеүселәр генә, әгәр ҙә күңел көстәре етһә, үҙ халҡының ҡошонан ҡеүәт ала башлай, тик бының өсөн бик ҙур ихтыяр көсө кәрәк. Әммә улар үҙҙәре иһә Рух ҡошон йәшәтеүгә күңел йылылығы бирә алмай.

Халҡы көслөрәк булған һайын, Рух ҡошо ла ҙурыраҡ була һәм оҙағыраҡ ғүмер итә. Ләкин ул ниндәй генә ҙур булмаһын, мең ярым йылдан оҙаҡ йәшәй алмай. Үҙ ғүмерен йәшәгәс, ояһына ултыра ла үлергә әҙерләнә. Рух ҡошоноң хәле бөткән һайын, халҡы ла ҡарыуы ҡайтыуын тоя. Был осорҙа халыҡ ялҡаулана, ваййымһыҙлана, насар холоҡтарға һәм төрлө ауырыуҙарға бирешә башлай. Рух ҡошо һәм бер-береһе менән бәйләп торған күңел нурҙары кәмегәндән-кәмей, бушағандан-бушай бара. Халыҡ яйлап ҡына тарҡала, күпселеге үҙе өсөн генә йәшәүҙе өҫтөн ҡуя. Һәм шуның менән үҙ-үҙен тағы ла көсһөҙләндерә, Рух ҡошоноң үлемен яҡынайта.

Ошо ваҡыт халыҡтың күпселеге Рух ҡошоноң көслө саҡтарын һағына, үҙәк өҙгөс йырҙар ижад итә, ниҙер эшләргә ынтыла, йөрәктәрендә нимәлер етмәүен тоя. Ләкин бөйөк эштәр башҡарыу өсөн уларҙың йөрәк һәм теләк көстәре - рухтары етмәй.

Ошо ауыр осорҙа халыҡтың бер өлөшө генә - иң көслө, иң рухлы улдары һәм ҡыҙҙары ғына йөрәктәрендә Рух ҡошо менән бәйләнешен һаҡлай. Әммә күңелдәре хәүефләнә, йөрәктәре ниндәйҙер көстөң кәмегәндән-кәмей барыуын һиҙә. Тик улар, дөйөм халыҡтан айырмалы рәүештә, нимә булһа ла эшләп, халыҡтың күңеленә элекке рухты ҡайтарырға тырыша. Халыҡ уларға эйәреп ынтылып та, талпынып та ҡарай, тик рух көсө бик һирәктәрендә генә уяна.

Бына иң ҡурҡыныс көн килеп етә, һәм Рух ҡошо үлә. Ошо көндән халыҡтың күпселеге ниндәйҙер бушлыҡ тоя. Башҡа бер нәмәне лә һағынмай; теле, халҡы, үткәндәре һәм киләсәктәре алдында бурыстары барлығын да онота. Улар өсөн иң мөһиме - бөгөнгө көн һәм ул үҙе. Һәр береһе айырым. Хатта ғаилә бәйләнештәре лә өҙөлә башлай. Халыҡтың күпселеге тере мәйеткә, ә рухһыҙ күңелдәре - ҡол күңеленә әйләнә: саялыҡ менән тәүәккәллек - әрләшергә яратыусанлыҡҡа; дуҫлыҡ - кешенән файҙа эҙләүгә; сәмселлек - көнсөллөккә; бер-береһенә ихтирам - ярамһаҡланыуға; ғорурлыҡ - үсексәнлеккә; тура һүҙлелек ғәйбәт һөйләргә яратыуға алмашынып бөтә.

Рухи байлыҡҡа ынтылыш та матди байлыҡҡа алмаштырыла.

Хатта кешенең аҡылы тураһында ла тик байлығы буйынса ғына фекер йөрөтөлә.

Халыҡта хаинлыҡ өҫтөнлөк ала башлай.

Ә күңелдәрендә Рух ҡошоноң эҙҙәрен һаҡлағандар ошо хәлде күреп, күңел ғазаптарына дусар була. Халыҡ булмышының төп сығанағы булған моңдо һәм телде, саялыҡты һәм ғәйрәтте, тоғролоҡто һәм ғорурлыҡты тергеҙергә тырыша, күңелдәрендә һаҡланған йылылыҡты бөтә халҡы менән уртаҡлашырға ынтыла. Ләкин халыҡтың күпселеге быны аңлай ҙа алмай, аңларға теләмәй ҙә, сөнки күпселек тик үҙе өсөн генә йәшәргә теләй, башҡа бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмай, киреһенсә, рухлыларға аптырап: "Нимә етмәй һуң һеҙгә?" - тип ғәжәпкә ҡала.

Ә рухлылар һаман Рух ҡошон терелтергә тырыша. Көслөрәктәре - көрәшә, көсһөҙөрәктәре инде халҡының был мәсхәрәһен күрмәҫ өсөн ситкә сығып китә. Әммә бөтәһененең дә күңеле һыҙлай, бөтәһе лә өмөтһөҙлөктән тонсоғор сиккә етә.

Ләкин өмөт бар. Сөнки Рух ҡошо үлер алдынан үҙ нәҫелен дауам итеү өсөн бер йомортҡа һалып ҡалдыра. Бер генә йомортҡа. Рух ҡошо үлеп, күпмелер ваҡыт үткәс, шул йомортҡа эсенән кескәй генә, көсһөҙ генә ҡошсоҡ килеп сыға. Ҡошсоҡ Рух ҡошоноң эсендә тупланған ризыҡ менән туҡлана, ә халыҡтың рухлы өлөшө, үҙҙәре лә һиҙмәйенсә, эшмәкәрлеге һәм күңел көстәре менән шул ҡошсоҡто йылыта, йәшәтә.

Әгәр ҙә халыҡ күңелендә шул ҡошсоҡто йәшәтерлек көс етмәй икән, ҡошсоҡ көс йыйып өлгөрмәйенсә, һәләк буласаҡ. Һәм уның халҡы шул көндән башлап Ер йөҙөнән бөтөнләйгә юҡҡа сыға башлай. Был күренешкә күрше халыҡтар битараф ҡала, ҡайғырмайҙар ҙа. "Рухһыҙҙарға шул кәрәк", тип кенә ҡуялар.

Ә әгәр ҙә халыҡ күңеле Бәләкәй ҡошсоҡто көс кергән сағына тиклем йылытып, йәшәтеп тора алһа, йөҙ ярым йылдан һуң ул яңы Рух ҡошона әйләнә. Һәм ошо осорҙан башлап халыҡ үҙенең уянғанын:

йөрәгендә яңы ҡеүәт барлыҡҡа килгәнен;

Рух ҡошоноң йәшәүен;

һәм үҙҙәренә

саялыҡ,

ғорурлыҡ,

ихтыяр көсөнөң

оло маҡсаттар менән йәшәүгә дәрт биреп тороуын тоя башлай. Кешеләр яңынан бер бөтөнгә - халыҡҡа ойоша, бер-береһен ярата башлай, онотолоп бөтөп барған

телен,

үҙ халҡына төҫ исемдәрен,

моңон

яңынан тергеҙәләр, йөрәктәрендә бер-береһе менән дә, Рух ҡошо менән дә нур бәйләнеше булдыралар. Бынан һуң уларға бер генә шарт ҡуйыла - үҙ рухтарына, үҙ булмышына хыянат итмәү...

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# МӨХӘРРӘМ АЙЫНЫҢ САУАПТАРЫ

**15 ноябрҙән һижри буйынса 1434 йыл башланды. Уның тәүге айы - мөхәррәм. Был айҙың үҙенсәлектәре тураһында Ҡөрьәндә һәм Бәйғәмбәребеҙҙең сөннәтендә күп әйтелә. Шуға күрә лә һәр мосолман айҙы файҙалы итеп үткәрергә тырышырға тейеш. Айҙың нисек үтеүе туранан-тура киләһе йылдың нисек буласағына бәйле. Имам Ғазали "Ихйә" тигән китабында, мөхәррәмде ғибәҙәттә үткәрһәң, уның бәрәкәте башҡа айҙарға ла етәсәк, тигән өмөт бар, тип яҙа. Имам Мөслимдең йыйынтығында килтерелгән хәҙистә, рамаҙан айынан һуң ураҙа тотоу өсөн мөхәррәм айы иң яҡшыһы, тип әйтелә. Тағы ла бер хәҙискә ярашлы, мөхәррәмдең кесаҙна, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә ураҙа тотоуға өҫтөнлөк бирелә.**

Мөхәррәм айының унынсы көнөн Ғәшүрә көнө тип йөрөтәләр. Ул был айҙың иң ҡиммәтле көнө. Был көндә, шулай уҡ мөхәррәмдең 9-сы һәм 11-се көндәрендә ураҙа тотоу хуплана. Хәҙистәргә ярашлы, Ғәшүрә көнөндә (24 ноябрь) тотолған ураҙа мосолмандың үткән һәм киләсәк йыл гонаһтарын юя. Был көндә бирелгән борсаҡтай саҙаҡа өсөн дә Аллаһы Тәғәлә Ухуд тауындай сауап бирәсәк.

Ғәшүрә көнөнөң үҙенсәлектәре. Әҙәм ғәләйһиссәләмдең тәүбәһе ошо көндә ҡабул ителә. Нух бәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләгә ышанған мөъминдәр менән туфандан һуң ҡотолоу ала, күпмелер ваҡыт һыуҙа йөҙөп йөрөгәндән һуң ҡоро ергә аяҡ баҫа. Шулай уҡ Муса ғәләйһиссәләм дә өммәте менән Мөхәррәмдең 10-сы көнөндә яуыз фирғәүендең эҙәрлекләүенән ҡотола. Шулай уҡ был көндә Ибраһим бәйғәмбәр тыуа, уның мөшриктәр утынан ҡотҡарылыуы ла Ғәшүрә көнөнә тура килә. Башҡа бәйғәмбәрҙәр тормошонда ла Ғәшүрә көнөндә билдәле ваҡиғалар булып үтә. Ғайса һәм Иҙрис күккә күтәрелә, Юныс балыҡ ҡарынынан ҡотола, Йософ зиндандан сыға, Әйүп оҙаҡ ваҡыт сирләгәненән һуң һауыға, Яҡуп улы Йософ менән осраша, Сөләймән батша була.

Ислам ғалимдары Аллаһы Тәғәлә Ерҙе, Күкте, фәрештәләрҙе һәм беренсе кеше - бәйғәмбәр Әҙәм ғәләйһиссәләмде ошо көндә яралтҡан, тип иҫәпләй. Ахырызаман да ошо көндә буласаҡ, ти улар. Был көндә сирленең хәлен белешеү бар кешелектең хәлен белешеүгә тиң. Был көндә тәртибенә килтереп ғөсөл алыусы төрлө сирҙәрҙән һаҡланасаҡ. Кем Ғәшүрә көнө алдынан төндө ғибәҙәттә үткәреп, был көндө ураҙала ҡаршы ала, ул үлем алды ғазаптарынан ҡотҡарыласаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЕТӘКСЕ ШӘХЕСТӘРГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Рәүеф БИКТАШЕВ, пенсиялағы уҡытыусы, Сибай ҡалаһы:** Был донъяла кешенең генә түгел, барлыҡ тереклектең дә тормошо - ул йәшәү, юҡҡа сыҡмау өсөн көрәш. Йылдар үтеү менән кешенең тормош тәжрибәһе үҫә һәм йәшәү ҙә еңелләшә бара. Шуның өсөн борон-борондан оло кешеләрҙең үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашып ҡалыу, йәштәрҙе өйрәтеү, иҫкәртеү йолаһы бар. "Йәштәрҙең аҡылы етһә ине, ҡарттарҙың хәле етһә ине" тигән һүҙ ҙә шуны дәлилләй. Минең дә, етмеш биш йыл ғүмер бейеклегенән тороп, үҙем дөрөҫ тип инанған ҡайһы бер фекерҙәремде йәштәребеҙгә еткергем килә. Ғөмүмән, милләттәштәребеҙгә әйтер һүҙем бар.

Әлеге мәлдә иң борсоулы, хәүефле күренеш - ул оптималләштереү. Ул оло-оло уйҙарға һала. Дөрөҫөн әйткәндә, минең ғүмерем эсендә ниндәй генә үҙгәртеп ҡороуҙар булманы! Ундай үҙгәрештәрҙе (йәғни болғаныштарҙы) совет осоронда бөтөн ил менән, барлыҡ халыҡтар күмәкләп күтәрҙек: аслыҡ булһа, бергәләп асыҡтыҡ, туҡлыҡ килһә, барыбыҙ бергә туйындыҡ. Ә бына һуңғы болғаныш - ул туранан-тура ауылдарға тоҫҡалған уҡ-һаҙаҡ тип һанайым. Быны бигерәк тә Баймаҡ районы миҫалында асыҡ күрәбеҙ. "Баймаҡтар - әүҙем халыҡ", тигән фекер нығынған, ләкин ошо әүҙемлек күп ваҡыт халҡыбыҙға зыян ғына итә. 1933 йылдан 1959 йылдарға тиклемге осор - Сталиндың репрессия осоро булып тарихҡа инде. Ваҡытында ошо кампанияны иң әүҙем тормошҡа ашырыусы район да Баймаҡ районы һәм Урал аръяғы райондары булған, иң күп ҡорбандар ҙа ошо яҡтарҙан.

Әлбиттә, төрлө саҡ булды. Баймаҡ районының иң алдынғы, ысынлап та төрлө өлкәлә өлгө итеп ҡуйырлыҡ мәлдәре лә әҙ булманы. Мәҫәлән, 1960 йылдарҙан алып, теге быуаттың 90-сы йылдарына, хатта быуат аҙағына тиклем дә юғары вазифаларға Баймаҡ вәкилдәре саҡырыла торҙо, һәм улар район халҡы тураһындағы ыңғай ҡарашҡа тап төшөрмәй, Башҡортостаныбыҙға ла, районға ла фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәтте.

Кемдәр һуң улар? Ул шәхестәрҙе халыҡ та, тарих та белә. Әммә ҡайһы берҙәрен иҫкә алып китеү урынлы булыр. Улар: Т. Х. Аслаев, З.Ш. Аҡназаров, Р. Ф. Абдуллин, Р. Ғ. Өмөтбаев һ.б. Ана шундай ҡая таш кеүек, йыраҡтарҙан күренеп торған вәкилдәребеҙ булды бит ваҡытында! Ә ниңә һуң һуңғы ун йыллыҡтарҙа күҙ терәрлек, барып аһ-зарыңды һөйләп, үҙ халҡың тормошон еңеләйтерлек, ярҙамы тейерлек шәхестәр үҫтерә алмай башланыҡ һуң? Шуның сәбәптәрен эҙләргә, асыҡларға кәрәк бит. Оло кәңәш талап итә был күренеш. Кем уйланырға тейеш һуң был турала? Әлбиттә, мәктәп, әлбиттә, мәғариф системаһы һәм район, ҡалаларҙың кадрҙар менән эшләргә тейешле органдары.

Кеше йәшәй-йәшәй ҙә фани донъяларҙан китеп бара. Шул сағында унан мәңгелек ҡиммәт булып, мираҫ булып нимә ҡала? Ҡәбер ҡалҡыулығы һәм был кеше тураһында мәғлүмәт яҙылған "баш ағасы" (йәғни ҡәбер ташы) ҡала. Был һәр кемдән дә ҡала торған мираҫ. Ә бына тарих итеп һөйләрлек яҡшы, данлыҡлы исемде һәр кем ҡалдыра алмай. Ниндәй оҙон-оҙаҡ юғары вазифа биләп ултырып та, үҙ артынан һис бер матур хәтирә ҡалдыра алмаған, хатта яман исем ҡалдырып киткән әҙәмдәр ҙә аҙ түгел барлай китһәң.

Баймаҡ ҡалаһының көнбайыш һырттарында хәҙерге көндә урман шаулап үҫә икән, уны беҙ Рәис Имам улы исеме менән бәйләйбеҙ. Әлбиттә, ул үҙе сығып урман ултыртмағандыр. Әммә ат атламаһа, арба тәгәрәмәй, тиҙәр. Тимәк, Рәис Имам улы йөҙәр йылдарға алға ҡарай белгән, уйлаған, ойоштороған, инандыра алған. Ул үҙенең шәхси байлығы менән түгел, ә Баймаҡ районының байығыуы, күтәрелеш осоро менән тарихта ҡалды. Ә кемдәр уның уй-маҡсаттарын шул осорҙа тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашҡан - улар ҙа яҡшы исемле кешеләр булып сыға. Шуға күрә, йәштәргә, бигерәк тә ҡулында власть тотҡан милләттәштәребеҙгә, ватандаштарыбыҙға ла әйтер һүҙем түбәндәгесә:

- үҙең генә туҡ булма, халҡың, милләттәштәрең дә уңып, барлы-көрлө бай булып йәшәһен өсөн тырышырға кәрәк;

- етәксе кешегә ҡыҙғансыҡ, көнсөл, эре, ғәрсел, үсле, кенәсел, арам, ҡомһоҙ, ялҡау булыу ярамай. Ул "Халҡым, милләтем, халҡымдың теле, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолаларының киләсәге өсөн миңә ни эшләргә?" тигән һорау ҡуйып эш итергә тейеш. Ошо тойғоно ул иң тәүҙә үҙендә үҫтерергә һәм ҡул аҫтында эшләгәндәрҙе лә шулай тәрбиәләргә тейеш.

Ни өсөн һүҙемде етәксе шәхестәребеҙгә бағышлайым әле һуң мин? Сөнки балыҡтың башы таҙалығын хәстәрләргә кәрәк, юғиһә, балыҡ бит башынан башлап серей. Етәкселәр битараф булһа, халыҡтың инициативаһы менән генә әллә ни ҡыйратып булмай. Шулай ҙа милләттәштәребеҙ хәҙерге мәлдә йәшәү өсөн көрәш хәлендә: ауылдарҙа ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар клубтары ойошторола, улар халыҡты айыҡ тормош алып барырға саҡыра, үҙ тирәһенә йәштәрҙе лә туплай, күп кенә ғаиләләрҙә тәрбиәгә күпләп бала алыуҙы ла ғәҙәт итеп алғандар, ҡайҙалыр димселәр клубы эшләй, Әбйәлилдә йәштәребеҙ кино төшөрөү тәжрибәһе туплай, кемдәрҙер үҙ аҡсаһына ауылдарҙың, ырыуының тарихына ҡағылған китаптар сығара, ә эшҡыуарҙарыбыҙ халыҡты эш менән тәьмин итеп тә милләтебеҙҙең киләсәген хәстәрләй.

Беҙ, ғәҙәттә, йәш егеттәрҙе, ир-атты ғәйепләргә әүәҫбеҙ, әммә минең күҙәтеүем буйынса, һуңғы осорҙа ир-егеттәр күпкә әүҙемерәк, аңлыраҡ, тәрбиәлерәк була бара. Әйтергә кәрәк, ир балаларға өмөт ҙур. Ә бына гүзәл заттарҙың "үтә гүзәллеге" хафаға һала. Шуға ла йәш ата-әсәләргә "Ҡыҙ балаңды ҡырҡ ерҙән тый" тигән мәҡәлдең асылын аңлау кәрәк, минеңсә.

Нисек кенә булмаһын, башҡортобоҙ милләт булып Хоҙай тарафынан яратылған икән, меңәр йыллыҡ тарих юлы үткән икән, уны беҙ төрлө үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һаҡларға, яҡларға тейешбеҙ. Ә һаҡланғанды Хоҙай ҙа һаҡлай.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҮҘЕН КӨЙҘӘТЕП...

## сыпрандығы сыға

**Тарҙай-торҙай ғына** - сибек кенә, ит ҡунмаған

**Тарҙай-торҙай булып утыра** - сәс-башын йыймаған, йыйыштырынмаған

**Шаа ла бирмәй** - бер кемгә лә һүҙ әйтергә бирмәй, бер мөмкинлек тә бирмәй

**Атаҡас, инәкәс** - бала ата-әсәһенә ныҡ оҡшаһа, шулай тиҙәр

**Сипселтмәй генә** - 1. Һыуҙы сайпылдырмай, кәметмәй алып ҡайтыу, нимәнелер әрәм итмәү, үтә лә ныҡ һаҡсыллыҡ; 2. Кеше һүҙен үҙгәртмәй генә кемгәлер килтереп еткереү (ғәйбәттең төрө)

**Дөрөп килә** - этеп-төртөп, йырып алға ынтыла

**Дөрөшөп алдылар** - яғалашып киттеләр, һуғыша яҙҙылар

**Зеркәндәк, зеркәндәп йөрөй** - сәбәпһеҙ үсеккән, юҡҡа үпкәләп барған кеше

**Геләүезник** - бәләсел кеше,"кляузник" һүҙенәндер

**Кәүкәсел** - берҙе биш итеп, ғауғалап йөрөгән кеше (ғауғасыл)

**Өлгөрйөм** - уңған

**Дан йоҫоҡ** (уҡып йөрөй) - һәйбәт, шәп

**Төйтөк** - кеше менән аралашып бармаған, һөйләшмәгән, йөҙөн асмаған кеше

**Мыштым** - әкрен ҡыбырлаған, уйында ни барын белеп булмай торған "серле" кеше

**Тумһайып, тумтайып** - үпкәләп өндәшмәй йөрөү

**Ҡыштырҙай** - көнләшә

**Ирешеү** - берәр яҙыҡ эш өсөн кемделер ҡыҙыртыу йә ике кешенең тиргәшеүе, әләгешеп алыуы

**Битәрҙәй, хурҙаша** - хурлай

**Беҙҙең һөйләштә "ж" өнө күп кенә һүҙҙәрҙә осрай:**
***жил, жәй, жәймә, жик***

***Жикһеҙ итеп*** - бер йөй ҡалдырмай **(жөй)**

***Жиңә, жиңмеш*** - еңмеш

***Жен -*** ен (эйәләшкән)

***Жендекәй*** ( кинәт ярһып, ҡыҙып киткән,үҙен адекват тотмаған кеше)

***Жикһегән*** - әйберҙең ышҡылып бөткән, тишелергә торған ере

**Нығынған һүҙбәйләнештәр**

**Маҙалыға йөрөй тиһеңме, маҙалы эш эшләп йөрөмәйһең әле** - һәйбәт тип әйтеп булмаған эш

**Маҙалы кеше түгел** - маҡтарлыҡ, яҡшы тип әйтерлек түгел

**Маҙаҡаттыма инде** - йүнле түгел дә, ни ере артыҡ

**Ауыҙы һәлберәгән** - үпкәләгән

**Сыпрандығы сыға** - бер урында ултырып сыҙай алмаған, тиктормаҫ, түҙемһеҙ кеше

**Күҙеңә күк йөн үҫкәнме** - бер нәмәне лә шәйләмәй, иғтибарһыҙ йөрөгән, күҙ алдында ятҡан әйберҙе лә таба алмаған кешегә әйтәләр

**Аңдып торған** - шымсы кеүек, күҙҙән ысҡындырмай, күҙәтеп, ҡарауыллап торған

**Әрәсәһенә сығыу** (етеү) - бер нәмәне төптән аңлау, мәғәнәһенә төшөнөү

**Бәләһен артып йөрөй шунда** - башҡаларға тынғы бирмәй,"үҙен көйҙәтеп" йөрөгән кеше

**Үҙен көйҙәтеп** - үҙенең мәшәҡәттәрен өҫтөн ҡуйып, үҙенә генә иғтибар талап итеп

**Үкерә лә баҡыра** - аңын-тоңон белмәй ҡысҡырынып, лаф ороп йөрөгән кеше

**Үҙе менән бер инде** - аҡылы самалы , иҫ китерлек түгел

**Иҫәр һүҙгә моңаймаҫ** - теленә нимә килә, шуны әйткән, уйламай һөйләшкән кеше

**Бер ҡыйҙыраҡ** - тулыр-тулмаҫ, ярты аҡыл

**Темекҫенеп** - соҡсоноп, эҙләнеп, ҡыҫылып йөрөүсе

**Һин эшлә лә мин эшлә** - эшләргә иренеп, еңешеп, һарыпташып ултырыу

**Һин өлгөр ҙә мин өлгөр** - эш бик күп тигән мәғәнәлә

**Тетмәкәйен тетеү** - кәрәген биреп әрләү, орошоу, туҡмау

**Түҙеп кенә тор, ни ереҢ ҡысый** - бик ҡаты оялтыу, өгөт биреү

**Ипкә килерлек түгел** - яҡшы итеп аралашырлыҡ, күндерерлек түгел

**Осорта ла төшөртә** - атта йә машинала бик шәп барыу

**Утын ағасы кеүек тә күрмәй** - машинаны шәп йөрөткән водитель хаҡында әйтәләр

**Килде-китте, кереп-сығып йөрөй** - уйлап-нитеп тормаған, аҡыллы ғына ҡарарға килә белмәгән кеше, тура мәғәнәлә: аҡылы теүәл түгел

**Өнөң тығылғыр** - ҡарғыш һүҙе: бик ныҡ битәрләшкән, йәнгә тейгән кешегә әйтәләр ҡайһы берҙә, әммә илаҡ балаңа, түҙмәйенсә, бындай һүҙ әйтеү - ҙур гонаһ

**Сығырымдан сығып** - түҙемһеҙләнеп

**Юҡҡа йоғандым** - үкенесте белдерә: юҡҡа яҡынайҙым

**Тотор ере юҡ** - үтә ябыҡ кеше тураһында

**Ары йөрөп ҡас. Ары йөрө** - һырыҡма, яҡынайма

**Бәләһенән баш-аяҡ** - хәүефле эшкә тарыуҙан ҡурҡыуҙы аңлата

**Бармаҡ менән дә сирткән юҡ, сиртке лә тейҙергән юҡ** - ҡул менән ҡағылған, һуҡҡан юҡ

**Кәкес-көкөс (яҙа)** - төҙ түгел, кәкере лә бөкөрө яҙа (баҫа)

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**Салауат районы Илсекәй ауылы.**
**(Аҙағы. Башы 45-се һанда).**

*✓ Ирҙәр ҙә үҙҙәренең кәүҙә ауырлығын контролдә тоторға тейеш. Бил әйләнәһе үлсәменең 92 сантиметрҙан артыуына юл ҡуйылырға тейеш түгел, юғиһә, улар организмында тестостерон гормонының бүленеп сығыуы кәмей.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИКМӘК ЕҪЕ...

## изге күңелле итә

■ Америка тикшеренеүселәре раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ, анығыраҡ әйткәндә, билдәге һәм аяҡтағы артыҡ майҙар насар йоҡлауҙың сәбәбе булыуы ихтимал. Джон Хопкинс университеты ғалимдары II типтағы шәкәр диабеты менән яфаланған һәм был ауырыу барлыҡҡа килеү хәүефе төркөмөндәге 77 кешене тикшереп ҡараған. Беренсе төркөм диетаға ултырған һәм физкультура менән шөғөлләнә башлаған. Икенсе төркөм диета менән генә сикләнгән. Ике төркөмдәге кешеләр дөйөм иҫәпләгәндә ете килограмға ябыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта был һынауҙа ҡатнашыусыларҙың 20 проценты йоҡлары яҡшырыуы тураһында белдергән. Ғалимдар әйтеүенсә, һимеҙ кешеләрҙә апноэ - йоҡлаған саҡта ҡыҫҡа ваҡытҡа тын алыу туҡталып тороуы йыш осрай. Апноэ менән яфаланыусыларҙа йөрәк һәм баш мейеһе ҡан тамырҙары проблемаһы ла була, сөнки мейегә кислород һәм файҙалы матдәләр етешмәй. Кеше ябығыу менән быларҙың барыһы ла юҡҡа сыға һәм ул яҡшыраҡ йоҡлай башлай.

■ Лондон ғалимдары әйтеүенсә, кеше тәнендәге миңдәргә ҡарап, уның ғүмер оҙайлығын билдәләп була. MedikForum яҙыуынса, әгәр ҙә миңдәр һаны йөҙҙән ашып китә икән, был кешеләрҙә һырҙар һуңыраҡ барлыҡҡа һәм улар тиҫтерҙәренә ҡарағанда күпкә йәшерәк күренә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе генетик Тим Спектор һөйләүенсә, һынауҙарҙа 18 йәштән 79 йәшкә тиклемге 1200 игеҙәк ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Тәнендә миңдәр күп булғандарҙың һөйәге лә нығыраҡ була, улар араһында остеопороз менән сирләүселәр булмай тиерлек. Ғалимдар әйтеүенсә, миң онкологик сирҙәргә килтереүе ихтимал тигән фекер төптө хата.

■ Францияның Көньяҡ Бретани университеты белгестәре әйтеүенсә, икмәк еҫе кешеләрҙе ягымлыраҡ, изге күңеллерәк итә. Ғалимдар ҡайһы бер аҙыҡ-түлектәрҙең еҫе кәйефте күтәреүен, тирә-йүндәгеләргә иғтибарлыраҡ булырға ярҙам иткәнен асыҡлаған. Уларҙың береһе - яңы ғына бешеп сыҡҡан икмәк еҫе. Белгестәр бер нисә көн дауамында магазинда һатып алыусыларҙы күҙәткән. Уларҙан тыш, ниндәйҙер әйберен юғалтыусы һатып алыусылар ролен уйнаусы актерҙар ҙа ҡатнашҡан. Ит йәки һөт бүлегендәге һатып алыусыларға ҡарағанда, икмәк бүлегендәгеләре актерҙарға йышыраҡ ярҙам ҡулы һуҙған. Сәбәбе - кешелә хәүефһеҙлек, шатлыҡ тойғолары уятыусы икмәк еҫендә, тип иҫәпләй ғалимдар.

■ Ғалимдар хәтер насарайыуы ҡартлыҡ ауырыуы түгел, тип белдерә. Был үҙгәнсәлек 30 йәште үткәндәрҙә лә күҙәтелә. Ғәҙәттә кешеләр өйҙән сығып киткәндә ойоҡ кейергә, күҙлек йәки асҡыс алырға, дөрөҫ яҙыу ҡағыҙҙарын, ПИН-кодтарҙы онота. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең 6 проценты йәштәр. Шулай уҡ күптәр хәтер насарайыуынан, уны юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып йәшәй икән. Уларҙың һаны 31 процентты тәшкил иткән.

■ Әүҙем физик күнекмәләр интеллект кимәлен үҫтереү һәләтенә эйә. Канада ғалимдары 49 йәштән оло кешеләрҙе тикшереп ҡараған. Уларҙың барыһы ла аҙ хәрәкәт иткән. Был тикшеренеү өсөн улар ғәҙәттәге тормоштарынан баш тартып, 4 ай дауамында физик күнекмәләр яһаған. Һөҙөмтәлә, уйлау һәм тиҙ ҡарар итеү һәләте күпкә күтәрелгән. Ғалимдар быны спорт менән шөғөлләнеү арҡаһында мейелә ҡан әйләнеше яҡшырыу менән аңлата.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

**Илдә демография мәсьәләһенең киҫкен тороуы бер кем өсөн дә сер түгел. Рәсәйҙә, мәҫәлән, 20 йәшлектәр быуыны 2,4 млн. тәшкил итһә, 14 йәшлектәр ике тапҡырға әҙерәк, йәғни 1,2 млн. Ошоға оҡшаш миҫалдарҙы тағы ла бик күп килтерергә булыр ине. Ил етәкселеге шуға ла тыуымды дәртләндереү буйынса һәр төрлө программалар ҡабул итә. Башҡортостанда ла был йәһәттән бик күп саралар тормошҡа ашырыла. 2003 йылда, мәҫәлән, Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән хәүеф төркөмөндәге ауырлы ҡатындарға һәм яңы тыуған сабыйҙарға юғары квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн Республика перинаталь үҙәге эшләй башлағайны. Ун йылға яҡын ваҡыт эсендә ошо диагностика һәм дауалау учреждениеһы ниндәй ҡаҙаныштарға өлгәште, бала табыу һәм ғаиләне планлаштырыу буйынса бында ниндәй төр медицина ярҙамы күрһәтелә, үҙәк тарафынан ниндәй яңы технология төрҙәре һәм дауалау алымдары үҙләштерелде? Һорауҙарыбыҙҙы Үҙәк белгестәренә йүнәлттек.**

# БАЛА ТАПМАҪ...

## ҡатын булмаҫ



**Фирғәт БАЙРАМҒОЛОВ, Республика перинаталь үҙәгенең баш табибы:** Үҙәк эшмәкәрлеге бала табыу һәм халыҡтың ишәйеү мәсьәләләре буйынса, шулай уҡ ғаиләне планлаштырыу, көтөлмәгән йөклөлөктө, енси юл менән таралыусы сирҙәрҙе иҫкәртеү, нәҫелдән килгән һәм тыуымыштан булған ауырыуҙарҙы дауалау һәм андрология өлкәһендәге сирҙәрҙе асыҡлау, дауалауға йүнәлтелгән. Беҙҙә ғаиләләргә һәм нәҫелдән, шулай уҡ тыуымыштан сирләләргә медицина-генетик консультация, һәр төрлө акушер һәм енси ағзалар сирҙәре менән яфаланыусы ауырлы ҡатындарға амбулатория һәм стационар шарттарҙа тикшереү үткәрелә. Үҙәктең амбулатория хеҙмәте эшләй. Уның ғаиләне планлаштырыу үҙәге, ярҙамсы репродуктив технологиялар бүлеге, медицина-генетик консультацияһы бар. Бынан тыш, учреждение лаборатор диагностикалау, стационар (80 урынлыҡ сирле йөклөлөк-акушер, 40 урынлыҡ реконструктив -пластик хирургия, 60 урынлыҡ гинекология бүлексәләре), шулай уҡ административ-хужалыҡ хеҙмәтен үҙ эсенә ала.

2004 йылда Үҙәктә асылған гинекология бүлегендә пациенттарға молекуляр-генетик тикшеренеүҙәр үткәрелә башланы. Бер йылдан, йәғни 2005 йылда, Өфөлә Медицина генетиктары Рәсәй йәмғиәтенең V съезы булып үткәйне. Унда ҡатнашыусы Рәсәй һәм сит ил белгестәре беҙҙең Республика перинаталь үҙәгендә лә булды, нәҫелдән һәм тыуымыштан килгән сирҙәрҙе иҫкәртеү буйынса медицина-генетик консультация эшмәкәрлегенә юғары баһа бирҙеләр. Беҙҙең Үҙәк юғары хәүеф төркөмөндәге ауырлы ҡатындарға һәм яңы тыуған сабыйҙарға заманса квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтә. Был осраҡта тикшереүҙәрҙең өр-яңы функциональ, аппарат һәм лаборатор ысулдары файҙаланыла. Бындай заманса аппараттарҙы ҡулланыу яралғының әсә ҡарынында үсешкән сағында уҡ ҡатмарлы сиргә, әйтәйек, тыумыштан йөрәк сиренә дусар булыуын асыҡларға ярҙам итә.

Бынан тыш, үҙәк табиптары тарафынан яралғының ҡан ауырыуын дауалау буйынса яңы ысул - әсә ҡарынында уҡ уның ҡанын алмаштырыу процедураһы үҙләштерелде.

Ә бына реконструктив-пластик хирургия бүлегендә аналыҡ эсендә хирургия алымы - гистерорезектоскопия ҡулланыу быға тиклем түлһеҙ тип табылған ҡатындарға үҙаллы бала табыу мөмкинлеген күпкә арттырҙы.

Элек-электән балаһыҙ ғаиләләрҙә төп гәйеп ҡатын-ҡыҙ өҫтөнә япһарыла килде, ә бит түлһеҙлек менән яфаланыусы ир-егеттәр ҙә күп. Простата биҙе ялҡынһыныуына дусар булған пациенттарға Перинаталь үҙәктә "Простасан" микротулҡынлы терапия аппаратында һөҙөмтәле ярҙам күрһәтелә.

Түлһеҙ ғаиләләргә ата-әсә булыу бәхетен татырға ярҙам итеүсе тағы бер юғары технологиялы медицина ярҙамы төрө - экстракорпораль аталандырыу ысулы. Перинаталь үҙәк эшләй башлағандан алып ошо юл менән 500-ҙән ашыу сабый донъяға килде. Хәйер, был хаҡта ентекләберәк ошо йүнәлештә эшләүсе белгесебеҙ һөйләр, ә мин гәзит уҡыусыларыбыҙға һөйөнөслө бер яңылыҡ еткермәксемен: тиҙҙән беҙҙең Үҙәк тағы ла үҫәсәк, уның янында бала табыу йорто төҙөү ҡарала. Киләһе йыл бюджетында ошо төҙөлөш өсөн аҡса бүлеү ҡаралды. Мәсьәлә юғары кимәлдә хәл ителгән: РФ Президенты Владимир Путин ошо туралағы документка ҡул ҡуйып, бөтөн төбәктәр иғтибарын Рәсәйҙә социаль һәм финанс әһәмиәтендәге мәсьәләләрҙән дә мөһимерәге юҡлығына йүнәлтте.

* * *

**Рәмилә ҮҘӘНБАЕВА, Республика перинаталь үҙәгенең юғары репродуктив технологиялар бүлеге мөдире:** Түлһеҙлек - ул бөгөнгө көндә бик актуаль мәсьәлә булып тора. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, түлһеҙлек менән яфаланыусылар һаны 15-18 процент тәшкил итә. Был, тимәк, һәр алтынсы ғаилә бала һөйөүҙән, атай һәм әсәй булыу бәхетенән мәхрүм, тигәнде аңлата. Ләкин, бәхеткә күрә, бындай хәл ниндәйҙер яза, ғаилә бәхетен емереүсе ҡотолғоһоҙ бәлә тип ҡаралмай бөгөн. Түлһеҙлек - фәҡәт теге йәки был сир эҙемтәһе генә түгел, ул бөтә йәһәттән дә сәләмәт ир менән ҡатында ла осрауы ихтимал. Медицинала, ғәҙәттә, бер йыл енси тормошта йәшәп тә ҡатын ауырға ҡалмаған осраҡ түлһеҙлек (түлһеҙ пар) тип танyла. "Түлһеҙ" мөһөрө ғаилә ағзаһының берәүһенә генә ҡағылмай, сөнки балаға ғүмер биреүҙә ике енес тә ҡатнаша. Бөгөнгө медицина ҡаҙаныштары бала бәхете татый алмаған ғаиләләргә ярҙамға килергә һәләтле. Мин был осраҡта ярҙамсы репродуктив технологиялар ысулдарын күҙҙә тотам. Ошо ысулдарҙың иң һөҙөмтәлеһе - экстракорпораль аталандырыу (ЭКО), йәғни кеше организмынан тыш, пробиркала енси күҙәнәктәрҙе аталандырыу ул. Был ысулды ҡулланыуға сәбәптәр түбәндәгеләр:

- абсолют түлһеҙлек (аналыҡ көпшәләренең булмауы йәки уларҙың үткәреүсәнлек һәләте юғалыуы);
-эндометриоз сире;
- гормональ фондың боҙолоуы;
- иммунологик факторҙарҙың тап килмәүе;
- ирҙәрҙең түлһеҙлеге.

Ҡатындарҙың балаға уҙмау сәбәптәре билдәһеҙ булған осраҡтарҙа ла ғаиләләр ЭКО процедураһына мохтаж тип табыла. Шул уҡ ваҡытта соматик йәки психик ауырыуҙар, яман шеш менән сирләгәндәргә был ысулды ҡулланыу тыйыла. Түлһеҙлек сәбәптәре, әйтеүемсә, ир менән ҡатындарҙа бер үк процент нисбәтендә килә. Ҡатындарҙың түлһеҙлек сәбәптәре юғарыла һанап кителде, ә бына ирҙәрҙә түлһеҙлеккә килтереүсе сәбәптәр иҫәбенә йышыраҡ экологик шарттарҙың насарайыуы, дөрөҫ туҡланмау, енси юл менән таралыусы йоғошло сирҙәргә дусар булыу һәм уларҙы үҙ белдектәре менән дауалап маташыу, алкоголле эсемлектәр ҡулланыу, тәмәке тартыу, наркоманлыҡ, репродуктив ағзаларға, йәғни енси ағзаларға температура тәьҫире (мәҫәлән, автомобиль ултырғысын йылытыу, мунса, сауна менән мауығыу һ.б.), артыҡ һимереү инә.

Әйткәндәй, ирҙәр ҙә үҙҙәренең кәүҙә ауырлығын контролдә тоторға тейеш. Бил әйләнәһе үлсәменең 92 сантиметрҙан артыуына юл ҡуйылырға тейеш түгел, юғиһә, һимеҙлек арҡаһында улар организмында тестостерон гормонының бүленеп сығыуы кәмей, ә был туранан-тура түлһеҙлеккә илтеүсе сәбәп.

Түлһеҙ ғаилә парҙарын консерватив дауалау саралары тейешле һөҙөмтә бирмәгән осраҡта уларға ЭКО ысулы ярҙамға килә. Республика перинаталь үҙәгендә юғары репродуктив технологиялар бүлеге 2006 йыл аҙаҡтарында асылғайны, беҙ ярайһы һөҙөмтәле генә күрһәткестәргә

✓ *Бындай ваҡытты ҡыҙыл эңер тип атайҙар. Көн менән төн сигендә ике донъя араһындағы шаршау асылып, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ рухтар кешеләр донъяһына бағa, тиҙәр.*





өлгәшәбеҙ. ЭКО процедураһының һөҙөмтәлелеге Европа һәм Рәсәй буйынса 28-35 процент тәшкил итһә, беҙҙең үҙәктә был күрһәткес - 45 процент. Бөгөнгө көнгә беҙҙә ошо ысул менән 500-ҙән ашыу бала тыуҙы. Тулһеҙҙәргә ярҙам итеү буйынса беҙҙең Перинаталь үҙәктә дүрт төрлө программа эшләп килә. Беренсе программа буйынса БР Хөкүмәте ҡарары менән аналыҡ көпшәләренең үткәреүсәнлек һәләте юғалыу сәбәпле, репродуктив йәштәге тулһеҙ ҡатындарға бушлай йылына 100 процедура үткәрелә. Уның өсөн түбәндәге шарттар мотлаҡ булып тора:

- беҙҙең республика биләмәһендә йәшәү;
- законлы никахта тороу;
- балаһыҙ ғаилә;
- яман ғәҙәттәрҙән азат булыу.

Был программа республика ҡаҙнаһы иҫәбенә атҡарылһа, икенсе программаны федераль бюджет әлеге әйтелгән категория пациенттар өсөн финанслай. Өсөнсөһө - башҡа төр сәбәптәр менән тулһеҙ ғаилә парҙарына ЭКО процедураһын Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында урынлашҡан перинаталь үҙәктәрҙә эшләтеү, тик был осраҡта юл һәм йәшәү сығымдары пациент иҫәбенә, процедура ғына бушлай яһала. Дүртенсе программа тулыһынса пациенттарҙың үҙ иҫәбенә атҡарыла.

Әйткәндәй, ЭКО процедураһын бушлай үткәреү өсөн беҙгә сират булыуын да билдәләп китәйек, сөнки хәҙер йылына ни бары 140 квота бүленә. Был бик аҙ, әлбиттә. Тағы шуны ла әйтеү кәрәктер, тип уйлайым: беренсе тапҡыр ЭКО үткәреү - ниндәйҙер дәрәжәлә диагностика процедураһы ла ул. Уны тәүге тапҡыр яһатып та, өҫтәүенә, уңышлы ла килеп сыҡһа, бигерәк тә яҡшы. Ә инде тәүге тапҡырҙан һөҙөмтә булмаһа ла бик көйөнөргә кәрәкмәй. Беҙ, табип-белгестәр, тәүге процедураның һәр этабын ентекләп анализлағандан һуң һәм тәүгеһенән 3-4 ай үткәс, уны тағы ҡабатлай алабыҙ. Процедураларҙың һөҙөмтәлелек ихтималлығы уны ҡабатлаған һайын арта бара, мәҫәлән, тәүгеһендә ихтималлыҡ ни бары 30 процент тәшкил итһә, икенсеһендә - 60, өсөнсөһөндә 80-85 процентҡа барып етә. Һәр үтелгән процедура ентекле анализлана. Әгәр ҡатын кешенең енси күҙәнәктәре сифатһыҙ икән, йә иһә гормональ фон түбән икән, донор күҙәнәктәре ҡулланырға тәҡдим итәбеҙ. Әгәр ҙә эмбриондарҙың сифаты булып та ҡатын ауырға ҡалмай икән, ул саҡта бала ятҡылығына өҫтәмә тикшереүҙәр талап ителә. Ә инде ир кешенең күҙәнәктәре аҙ булһа йәки уларҙың аталандырыу сифаты түбән икән, ул саҡта ИКСИ программаһы эшкә ҡушыла, йәғни микромолекуляр технология ярҙамында ирҙәр күҙәнәген аталандырыуға өлгәшелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика перинаталь үҙәге белгестәре раҫлауынса, хәлдәр төрлөсә була: ҡайһы саҡ әле һанап кителгән технологиялар тейешле һөҙөмтә бирә алмаһа, ир менән ҡатынға суррогат әсәлек программаһы, йәки сабыйҙарҙы уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алырға тәҡдим ителә. Юғары көс, әйтерһең дә, кешеләрҙе ошоноң менән сабырлыҡҡа, түҙемлеккә, изге күңеллеккә һынай. Тәрбиәгә балалар алып, аҙаҡ үҙ ҡанынан яралған сабыйын күкрәгенә ҡыҫып һөйөргә насип булған бәхетле яҙмыш эйәләре лә бихисап икән...**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Хроник бронхит: тыуыу тарихы

**1966 йылдыңмы икән, әллә 1967 йылдыңмы август һуңында энеләрем һәм дуҫтарым менән балыҡтан ҡайтып килә инек. Балыҡ күп элэкте: һәр ҡайһыбыҙ өс тиҫтәнән ашыу эре балыҡ тоттоҡ. Был ваҡытта балыҡтар күренмәҫ эркеү булып Һаҡмар үренә табан хәрәкәт итә башлай. Йылға Урал йылғаһының ҡушылдыҡтарының береһе булып тора, ә ул, мәғлүм булыуынса, Каспийға ҡоя. Был ваҡытта балыҡты нисек теләйһең, шулай тоторға була, сөнки ул уяулығын да, һаҡлығын да юғалта. Киске сәғәт етенән төнгә тиклем балыҡ яҡшы тотола. Балыҡсылар ҡармаҡтарға селәү ҡуйып, һыуға ырғыта һәм бер-ике минутта 30-40 сантиметрлыҡ балыҡты һөйрәп тә сығара. Бик ҙур балыҡ ҡармаҡ ебен өҙөп йәки ҡармаҡ менән ҡалҡыуыстарҙы бергә һөйрәп тәрәнгә киткәндә генә тыныслыҡ урынлаша.**

Шундай балыҡ ҡармаҡлауҙарҙың береһенән һуң күмәкләп өйгә ҡайтып барабыҙ. Балыҡ ҡармаҡлаған урындан тыуған ауылға тиклем сама менән өс саҡрым тирәһе атларға кәрәк. Һуҡмаҡ йылға үҙәне буйлап һалынған һәм уның буйынса барыу ауырлыҡ тыуҙырманы. Тәүҙә һуҡмаҡ ҡалҡыулыҡ аша үтеп, ҡапыл киң яланға барып сыға. Шунан инде йәйәүлеләр алдында ауыл һәм йылғаның боролмалары күренеше асыла.

Ул кистә мин беренсе булып атлай инем. Ҡояш күптән инде офоҡ артына йәшеренгән. Көнбайышта күк йөҙө ҡыҙарып янып тороуын дауам итә, әммә яҡты әле. Бындай ваҡытты ҡыҙыл эңер тип атайҙар. Башҡорттарҙың хөрәфәти риүәйәттәре был ваҡытты кеше өсөн хәүефле тип һүрәтләй. Көн менән төн сигендә ике донъя араһындағы шаршау асылып, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ рухтар кешеләр донъяһына бағa, тиҙәр. Ололар был ваҡытта йәш килендәргә сабый балаларҙы тәҙрә эргәһенә килтереүҙе тыя, сөнки уларҙың күҙенә икенсе донъя йән эйәләре күренергә мөмкин. Уларҙың ҡиәфәте шундай ерәнес, оло кеше уларҙы күрмәһә лә, бала уларҙы күреп, ғүмерлеккә диуана булып ҡалыуы ихтимал.

Беҙ асыҡлыҡҡа тап ҡыҙыл эңерҙә сыҡтыҡ. Ҡалҡыулыҡ бөткәс, түбәләҫкә мендек, шунда мин һауаның сәйер хәрәкәтен тойҙом. Бөтөн урап алған һауа массаһы һалҡын һәм бер урында тик тора, ә был хәрәкәтләнеүсе һауа йылы һәм йәбешкәк ине. Елдең өҫкө башланғыс өлөшө битемә ҡағылып, ағып төшә башланы. Ә бына мин һуңыраҡ тойған аҫҡы өлөшө аҡманы, ул нисектер күкрәк ситлегенең эсенә ингән кеүек тойолдо. Ул ваҡытта мин был ваҡиғаға артыҡ иғтибар итмәнем. Аңлау һәм сәбәп-эҙемтә бәйләнештәре күпкә һуңыраҡ килде.

Өйҙә мин үҙемде насар тойҙом. Тәнем өшөүҙән ҡалтыранды. Һыуыҡты еңеү өсөн мин һарыҡ йөнөнән һырылған одеялға төрөнөп, карауатҡа яттым. 15 минут ятҡандан һуң одеялдың бөтөнләй йылытмағанына аптыраным. Был һалҡынлыҡ элек мин осраған һыуыҡтан башҡасараҡ - эстән килә ине. Ул ниндәйҙер формаға эйә һәм бөтөн тәнде түгел, ә уның ниндәйҙер өлөшөн генә алып тора. Аныҡыраҡ әйткәндә, был сәйер һыуыҡ күкрәк ситлегенең эсенә йәшеренеп, уның формаһын ҡабатлай һәм тышҡы сигенә яҡынса өс-биш сантиметр самаһы етмәйерәк туҡтала. Был серле һыуыҡты аңлатып яҙыуы еңел эш түгел. Уны үҙеңә тойорға кәрәк. Мин өшөп, тешем тешкә теймәй ҡалтырай башланым. Бөтөн тәнем йәбешкәк тир менән ҡапланды. Бигерәк тә ике ҡалаҡ һөйәге араһындағы тән өлөшө туңды.

Бүлмәгә әсәйем инде. Беҙ балыҡтан ҡайтҡанда ул һыйыр һауа ине. Кесе туғандарым уға минең ауырыуым тураһында әйтеп өлгөргән икән. Әсәйем яныма килеп, ауырыуҙың нисек барлыҡҡа килеүен һораны. Яуабымдың күкрәгемә инеп туҡталған сәйер ел тураһындағы өлөшөн бигерәк тә иғтибарлап тыңланы. Һуңынан хәүефләнеп: "Зәхмәт кенә ҡағылып ҡуймаһын инде, балаҡайым!" - тине. Ҡулын маңлайыма ҡуйып ҡарағас, аптырап китте, маңлайым боҙ кеүек һалҡын һәм тирле ине. "Әхмәт олатайға барайым әле. Бөгөн иртән уның Рәшитен күргәйнем. Ул - мединститут студенты. Уҡыуҙан һуң ялға ҡайтҡан. Бәлки, нисек дауаларға кәрәклеген әйтер", - тип әсәйем сығып китте.

Бер нисә минуттан ул ҡабат инде. Ике төймә дарыу бирҙе. Мин уларҙы тешем менән тураҡлап йоттом һәм артынан һыу эсеп ҡуйҙым. Еңел булып ҡалды. Тынысланып йоҡлап киткәнмен. Иртән инде теремек һәм сәләмәт булып килеп торҙом. Һәм тормошомдағы был эпизод тураһында бөтөнләй оноттом. Әммә теүәл бер йылдан, август һуңында, ҡабат ауырыным. Ауырыу билдәләре бер йыл элек нисек булһа - тап шулай ине. Күкрәгемдә тере йәнгә оҡшаш сифаттарға эйә һыуыҡ борғолана. Ошо сәйер һыуыҡ тәьҫире аҫтында мин һуңынан хроник бронхит менән ауырый башланым.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Камиллыҡҡа һигеҙ аҫҡыс

### Икенсе аҫҡыс: белем һәм уҡыу

Үҙегеҙ ынтылған маҡсаттың һөҙөмтәһен белгәс, ошо предмет хаҡында белем базаһын тупларға ныҡлы ҡарар ҡабул итегеҙ. Был базала барлыҡ һорауҙарығыҙға ла яуаптар бар. Был тормошта мөмкин булған хаталарҙы бер нисә тапҡыр ҡабатланығыҙ, уларҙы тағы ҡабатларға ваҡытығыҙ бармы һәм улар кәрәкме?

Үҙ эшенең оҫтаһы булыусылар менән аралашығыҙ. Уңыш ҡаҙаныу өсөн улар нимә эшләгән? Үҙ предметығыҙ буйынса китаптар уҡығыҙ, кассеталар тыңлағыҙ һәм семинарҙарға йөрөгөҙ. Алға, камиллыҡҡа барыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеген белеү мөһим. Үҙегеҙгә иң яҡшы уҡытыусыны һайлағыҙ һәм ул нимәгә өйрәтә, шуны тыңлағыҙ. Уҡыу процесынан мөмкин булған тиклем ҡәнәғәтлек алырға тырышығыҙ. Бер кем дә һеҙҙең күңелегеҙҙе һүрелдерә алмаясаҡ һәм тормошоғоҙ ҡыҙыҡлы мажараға әйләнәсәк.

### Өсөнсө аҫҡыс: "Кайзен" һәм көсөргәнешле күнекмә

"Кайзен" - даими һәм өҙлөкһөҙ камиллашыу - ярҙамында мөғжизә тыуҙырып булыуы тураһында быға тиклем яҙылғандар аша танышһығыҙ инде. Үҙ эшегеҙҙә тулы камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн шәхесегеҙҙе һәм ҡеүәтегеҙҙе үҫтереү өҫтөндә көн һайын нимәләр эшләгеҙ. Бында тәжрибә һәм яҡшы ғәҙәттәр булдырыуҙан башҡа бер нәмә лә юҡ, улар һеҙгә үҙегеҙ ынтылған юғары кимәлгә күтәрелергә ярҙам итер.

Ғәҙәти тормошҡа теләһә ниндәй үҙгәрештәр индереү тәүҙә уңайһыҙлыҡ тыуҙырыр. Күнекмәләр эшләү, медитация һәм көндәлек ғәҙәттәрҙе башҡарыу тәүҙә ауыр бирелер. Әммә көн һайын сираттағы ҡаршылыҡты үткәндән һуң һеҙ көслөрәк була барырһығыҙ. Артабанғы һәр аҙым еңелерәк бирелер.

### Дүртенсе аҫҡыс: ныҡышмаллыҡ

Ҡаршылыҡтар һәм көтөлмәгән бороloштар булмаған бер генә юл да юҡ. Был - тәбиғәт ҡануны. Ҙур булмаған ҡаршылыҡтар беҙгә үҙ-үҙебеҙҙе тикшереп ҡарау, камиллашыу һәм мөмкинлектәребеҙҙе киңәйтеү өсөн бирелә. Тормошоғоҙҙа осраған проблемалар тураһында иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Уларҙың һәр ҡайһыһын еңеп сыҡҡандан һуң һабаҡ алдығыҙмы? Күпселек һабаҡ алған.

Шулай ҙа ҡайһы берәүҙәр, йөҙгә-йөҙ осрашыр урынға, проблемаларҙан ҡаса. Улар бары тик теләһә ниндәй ауырлыҡты ла еңеп була, улар беҙгә аҡыл өҫтәй икәнлеген аңламай. Ныҡышмаллыҡ - камиллыҡҡа барған юлда төп аҫҡыс. Әгәр кеше барған йүнәлешенән туҡтауҙан баш тарта икән, уны бер нәмә лә туҡтата алмай. Һәр проблеманың сиселеше бар. Әгәр һеҙ ниндәйҙер насарлыҡ эшләргә теләһәгеҙ ҙә, уның өсөн дә үҙенең юлы табыласаҡ. Ныҡышмаллыҡтан башҡа уңыш тарихы юҡ. Үҙегеҙҙә ошо сифатты үҫтерегеҙ һәм ул бер ҡасан да һынатмаҫ.

**Робин ШАРМА.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**45-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Трактор. Дәүләтшина. Арпа. Әберсен. Нәрәтә. Патриарх. Мода. Мөғәмәлә. Персонаж. Старшина. Мәгәрис. Әлморон. Арыш. Мәхәллә. Лексика. Фил . Ҡала. Торатау. Табалдырыҡ. Мостафин. Нужа. Уғры. Шпрот. Мөһөр. Ыҙан. Айташ. Сүре. Ноғоманов. Актер. Шына.

**Вертикаль буйынса:** Имам. Ямалетдинов. График. Жом. Йәнлек. Телеграмма. Ыжыҡа. Штопор. Етмеш. Каштан. Ҡылыс. Аҙаш. Папа. Мышар. Аласа. Әлмисаҡ. Виза. Ағас. Рәсем. Хурал. Албаҫты. Рельеф. Иваси. Хажин. Әжәл. Неон.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 ноябрь "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А.Островский), драма

**18 ноябрь "Хыялый"** (С.Әбүзәр), лирик комедия

**20 ноябрь "Аты барҙың - дәрте бар"** (Н.Ғәйетбай), комедия

**21 ноябрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф.Бүләков), музыкаль комедия

**22 ноябрь "Эх, кәләше лә кәләше!"** (Х.Зарипов), музыкаль комедия

**23 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 ноябрь "Нух кәмәһе"** (У.Хуб), бөтә ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00

**20 ноябрь "Алтын балта"** (С.Сурина), әкиәт. Башлана 11.00

**20 ноябрь "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г.Зәйнәшева), комедия

**22 ноябрь "Йәләлетдин атай"** (М.Кәрим), уйланыуҙар

**23 ноябрь "Хазина"** (Р.Бикбай), шиғри спектакль

## КЕМ АЛЫҠ?

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 ноябрь** көндө **"Далан"** төркөмө **"Бәхеткә лайыҡ һин"** исемле өр-яңы концерт программаһы тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, был төркөм үҙенең рухлы һәм шул уҡ ваҡытта дәртле йырҙары менән башҡаларҙан айырылып тора. "Далан" башҡарған йырҙар оптимистик рух һәм позитив энергия менән һуғарылған. Был юлы ла тамашасылар Айгөл Һағынбаева, Миңзифа Искужина, Вильмир Әүбәкиров, Венера Рәхмәтуллина, Таһир Шәһивәлиевтың йырҙарын, Урал Мортазин, Раил Лоҡмановтың дәртле бейеүҙәрен, төркөмдөң етәксеһе Башҡортостандың халыҡ артисы Артур Туҡтағоловтың сығышын ишетә аласаҡ. Шулай итеп, донъя мәшәҡәттәрен артҡа ҡуйып, матур йырҙар, дәртле көйҙәргә сорналып ял итергә теләһәгеҙ, түбәндәге һорауҙарға дөрөҫ яуап бирергә генә кәрәк. Иң отҡорҙар һәм состарҙы концертҡа саҡырыу ҡағыҙы көтә.

**1.** "Далан" төркөмөнөң исеме ниндәй мәғәнә аңлата?

**2.** А.Туҡтағоловтың популяр йырҙарын һанап сығығыҙ?

**3.** "Далан" составында яңыраҡ ҡына сығыш яһай башлаған билдәле йырсы кем ул?

**4.** "Далан"ға нисә йәш?

**Телефон: 252-39-99**

## ИҒТИБАР!

45-се һандағы сканворд еңеүсеһе Федоровка районынан **Мәүлитова Гөлшат**. Еңеүсе “Башҡатырғыстар һәм башватҡыстар” гәзите менән бүләкләнә.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ТАМАҒЫҢ АУЫРТАМЫ?

## Һарымһаҡ ҡуллан!

**Көҙ үҙ хоҡуҡтарын көндән-көн нығыраҡ белдерә бара. Ьыуыҡ һәм ямғырлы көндәр, үҙ сиратында, тымау тейеү, йүтәлләү һәм тамаҡ ауыртыу кеүек ауырыуҙарҙы "эйәртеп" алып килә. Бөгөн беҙ гәзит уҡыусыларға тамаҡ ауыртҡанда ҡулланыу өсөн бер-нисә халыҡ дауаһы тәҡдим итәбеҙ.**

- Бер баш һарымһаҡты турап, кәстрүлгә һалырға һәм 1 литр һыу ҡойоп ҡайнатырға ҡуйырға. Ьыу ҡайнап килгәндә уға 1 балғалаҡ сода һалып болғарға. Ошо ҡайнатма менән көнөнә 3 тапҡыр ингаляция эшләргә. Һәр ингаляция алдынан төнәтмәне ҡайнатып алырға.
- Ҡаты итеп сәй бешереп, бер аҙ һыуытырға. Уға бер балғалаҡ тоҙ һалып болғарға һәм көнөнә бер-нисә ҡат тамаҡты сайҡатырға.
- Тамаҡ ауыртҡанда ҡайнап бер аҙ һыуыған һыуға 0,5 балғалаҡ тоҙ, сода һәм бер-нисә тамсы йод һалынған ҡайнатма менән сайҡау ҙа файҙалы.
- Тамаҡ ауырта башлаған ғына ваҡытта ҡабығы менән ярты лимонды яйлап сәйнәргә. Унан һуң бер сәғәт ашамаҫҡа һәм эсмәҫкә, сөнки был ваҡытта лимондағы эфир майҙары һәм лимон кислотаһы тамаҡтағы эрен менән "көрәшә". Процедураны 2 сәғәттән һуң ҡабатларға.
- Тамаҡ ауыртыуҙан тауыш ҡарлыҡҡанда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-1,5 стакан мәтрүшкә төнәтмәһе эсеү яҡшы һөҙөмтә бирәсәк.
- Көнөнә 10 һәм унан да күберәк тапҡыр тамаҡты 10-15 минут сәй бәшмәге төнәтмәһе менән сайҡау ангинанан бер тәүлектә ҡотолорға ярҙам итә.
- 1 балғалаҡ тал ҡайырыһын 1 стакан эҫе һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатырға. Бер аҙ һыуытҡас, һөҙөргә һәм аш алдынан 1/3 стакан эсергә.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

*О, СПОРТ!*

# ӨФӨГӘ КИЛЕП...

## билең биртенмәһен!

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының "Динамо" спорт комплексында Халыҡ-ара билбау көрәше федерацияһы, Бөтә Рәсәй билбау көрәше федерацияһы, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан ойошторолған Халыҡ-ара билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты булып үтте. Унда 22 дәүләттән 120 спортсы ҡатнашты. Рәсәй йыйылма командаһын был юлы 40 кешенән торған команда тәшкил итте. Ә Башҡортостан данын 11 көрәшсе яҡланы.**



Халыҡ-ара билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты тамамланғас, өсөнсө тапҡыр уҙғарылған сара - Рәсәйҙә билбау көрәшен үҫтереүгә күп көс һалған яҡташыбыҙ Риф Ғайнанов иҫтәлегенә арналған халыҡ-ара турнир башланды. Донъя чемпионатында ҡатнашҡан барлыҡ спортсылар үҙҙәренең оҫталығын ошо мәртәбәле ярышта ла һынап ҡарай алды. Был ярыштың инде халыҡ-ара статусын алыуын, уның Азия һәм БМО дәүләттәрен генә түгел, ә АҠШ, Швеция кеүек сит илдәрҙе лә ҡыҙыҡһындырыуын билдәләргә кәрәк. Турнирҙа 100 һәм100 килограммдан ашыу ауырлыҡ категория спортсылары араһында ғына Рәсәй спортсылары беренселеккә сыға алманы. Башҡа категорияларҙа рәсәйлеләр, шул иҫәптән 68 килограмм ауырлыҡта Ринат Еникеев менән 90 килограмм ауырлығында Рөстәм Исламов тәүге урындар яуланы.

Бөтә Рәсәй билбау көрәше федерацияһы президенты Морис Харис улы Йосопов әйтеүенсә, был ярышта Рәсәй йыйылма командаһы үҙен бары тик яҡшы яҡтан ғына күрһәткән. Чемпионат иң юғары кимәлдә ойошторолған. Сит ил ҡунаҡтары тәүлектең ниндәй ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, яҡшы итеп ҡаршы алынған, ҡунаҡханаларға урынлаштырылған. Был чемпионатта беренсе тапҡыр волонтерҙар йәлеп ителгән. Чемпионат сиктәрендә Рәсәй төбәктәре һәм Башҡортостан райондары вәкилдәренең барыһына ла спорт кейеме һәм көрәш келәмдәре бүләк ителде. Морис Харис улы был башланғысты ла ыңғай баһаланы.

Украинаның Донецк ҡалаһынан килгән Дмитрий исемле спортсы егет менән һөйләшеп киттек. Ул быға тиклем Башҡортостан тураһында бер ни ҙә белмәгән булыуын билдәләне. "Чемпионат лайыҡлы кимәлдә ойошторолдо, артығын теләргә лә кәрәкмәй, - тине ул. -Украинала әлеге мәлдә халыҡты ҡайғыртҡан милли сәйәсәт тулы ҡеүәт менән эшләмәй, власҡа бары тик үҙ ҡаҙнаһын тултырыр өсөн генә киләләр", - тип, Украиналағы сәйәси хәлдәр менән дә таныштырып үтте егет. Егет үҙе ике стилдә лә өсөнсө урындар яуланы.

Артабанғы әңгәмәсебеҙ - Үзбәкстан йыйылма командаһының өлкән тренеры Шәфҡәт Мирзаҡулов. Ул Башҡортстанда быға тиклем бик күп тапҡырҙар булған, Өфө ҡалаһы, башҡорт спортсылары менән яҡшы таныш. Ул күп йылдар инде Башҡортостанда үткән билбау көрәше ярыштарына үзбәк батырҙарын алып килә. Был ярышта үзбәк егеттәренең ун миҙал яулауын, шул иҫәптән берәүһе алтын миҙалға лайыҡ булыуын, өфөләләрҙең был ярышҡа һәр яҡлап яҡшы әҙерләнгәнлеген билдәләне. Ул тағы ла спортты дәүләттәрҙе берләштереүсе, халыҡтарҙы бер-береһенә яҡынайтыусы сара, тип атаны. Был фекерҙе инҡар итеү мөмкин түгел. Әйтәйек, ярышта ҡатнашыусы командалар исемлегендә Грузия дәүләтенән дә вәкилдәр килгәйне. Илдәр, дәүләттәр араһындағы дуҫлыҡ сәйәсәт ярҙамында юҡҡа сығарылһа ла, ул дуҫлыҡ дипломатик алымдар, шулай уҡ мәҙәни, спорт һәм башҡа саралар ярҙамында ҡайтанан тергеҙелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Киләһе 2013 йылда ла Өфөлә Халыҡ-ара билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты көтөлә. Өфө 2021 йылда үтәсәк олимпия уйындарына ҡарамаған спорт төрҙәре буйынса донъя чемпионатында ҡатнашырға дәғүә итә. Был хаҡта Морис Йосопов белдерҙе. Уйындар булып торор, уларҙың ҡасан үткәне лә онотолор. Әммә батырҙар ғына онотолмаҫ. Шулай уҡ, был уйындарҙың ҡайҙа үтеүе лә хәтерҙә ҡалыр. Юҡҡа ғынамы ни, Канны ҡалаһы үҙенең кинофестивалдәре менән дан тота, Юрмала юмор фестивале урыны булараҡ бар Евразияға билдәле. Киләсәктә Өфөнө лә ниндәйҙер берәй яҡшы башланғыстың үҙәге булған урын тип белә башларҙар әле, тигән өмөт бар.**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

*АТЫҢ КЕМ?*

# ГӨЛДӘЙ НАҘЛЫ НАҘГӨЛ



Күҙҙәренән оҫҡон, нур сәселеп торған был матур ҡыҙыҡай Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында йәшәүсе Наҙгөл Сафиуллина. Ата-әсәһенә, ике ағаһына һыйынып, туғандарына иркәләнеп кенә үҫеп килеүсе Наҙгөл гөлдәй наҙлы, шул уҡ ваҡытта шуҡ, ҡыҙыҡһыныусан, тиктормаҫ бала. Шул уҡ ваҡытта ул ололарса фекер йөрөтөүе, һәр нәмәне төптән уйлап эш итеүе, һәр һүҙен үлсәп һөйләүе менән тирә-яҡтағыларҙы таң ҡалдыра. Уның бихисап һорауҙарына яуап табып өлгөрөү ауырға тура килә, сөнки Наҙгөлдө үҙен уратып алған бар нәмә ҡыҙыҡһындыра. Бөхтәлекте һәм таҙалыҡты яратҡан ҡыҙыҡай башҡаларҙан да шуны талап итә. Башына килгән уй-фекерҙән бер ҡасан да баш тартмайынса, аҙағынаса алып барып еткереп ҡуйыу ҙа уның төп һыҙаттарының береһе. "Ололар донъяһынан" арып китһә, ул ҡурсаҡтар "иленә" юл тота һәм бер кемгә лә иғтибар итмәйенсә, сәғәттәр буйына уйнай. Бына ошондай барыһының да күңелен күтәреп, йәшәүгә дәрт өҫтәп тороусы ҡыҙыҡай үҫеп килә Әнүр һәм Илсиә Сафиуллиндар ғаиләһендә.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЛАР ТҮРӘ...

## иле менән уйнар

Балаһыҙ кеше кеше һөйләр, балалы кеше балаһын һөйләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Минең фәлсәфәм ябай ғына: бушағанды тултырам, тулыны бушатам, ҡысыған урынымды тырнайым.

**(Эллис Рузвельт).**

Ысын дәрәжә йылға һымаҡ: ни тиклем тәрәнерәк булған һайын, тауышы аҡрынырак сыға.

**(Мишель де Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер эшҡыуар тәбиғәт ҡосағында ял итеп йөрөгәндә йылғала бәләкәй генә кәмәлә ҡармаҡ тотоп ултырған балыҡсыны күреп ҡала. Шул мәлдә генә балыҡсының ҡармағына ҙур балыҡ эләгә. Ошо табыштан һуң балыҡсы ҡармағын һыуҙан алып, кәмәһен ярға ишеп, өйөнә ҡайтырға йыйына башлай. Барыһын да күҙәтеп торған эшҡыуар унан былай ҙур балыҡ эләктергәнсе күпме ваҡыт үтеүен һорай. "Бер-ике сәғәт самаһы..." - тип яуаплай балыҡсы. "Улай булғас, ниңә һин оҙаҡҡараҡ ҡалып, тағы ла ошондай бер нисә балыҡ тотмайһың?"- тип аптырап һорай эшҡыуар. "Иртәгәгә тиклем минең ғаиләмә бер балыҡ та етә", - була яуап. "Ә һин, ғөмүмән, көнөңдө ни менән үткәрәһең һуң?" - ти эшҡыуар. "Төшкә ҡәҙәре йоҡлайым, бер-ике сәғәт балыҡ ҡармаҡлайым, шунан балаларым менән уйнайым, ҡатыным менән аралашам, уға ҡайһы бер эштәрҙә ярҙамлашам, шунан урам буйлап сығып китәм, таныштар, дуҫтар менән аралашам, гитарала уйнап, йырлап та алабыҙ. Бына шулай, тормоштоң бар ләззәттәрен татып йәшәйем мин", - ти балыҡсы. "Һин дөрөҫ йәшәмәйһең, дуҫ кеше. Әйҙә, мин һине нисек дөрөҫ эшләргә өйрәтәм. Шунан башлайыҡ: һин көнө буйы балыҡ ҡармаҡла, уны һатҡан аҡсаға үҙеңә ҙур кәмә һатып ал..." "Ә шунан нимә эшләйем?" - тип һорай балыҡсы. "Шунан һин тағы ла күберәк балыҡ тота башлаясаҡһың һәм тағы ла бер кәмә, хатта корабль һатып ала аласаҡһың.." "Артабан нимә?" "Артабан иһә һин балығыңды аралашсы аша түгел, ә туранан-тура эшкәртеүсе заводҡа үҙең килтереп тапшыра башлаясаҡһың. Шунан инде үҙең асасаҡһың былай заводты..." "Шунан нимә?" "Шунан инде һин үҙеңдең был төпкөл ауылыңды ҡалдырып, ҡалаға күсерһең, шунан үҙең асҡан фирманың директоры булып китерһең..." "Директор булғансы күпме ваҡыт үтәсәк инде?" "Ун биш-егерме йыл үтәсәк..." "Унан һуң нимә буласаҡ?" "Унан һуң тормошоңдоң иң күңелле мәле башланасаҡ. Һин үҙеңдең фирмаңды бер нисә миллионға һатасаҡһың һәм иң бай кешегә әүереләсәкһең". "Ә артабан?" "Һуңынан һин эшләүҙән туҡтайһың да, бәләкәй генә берәй ауылға күсеп, тормоштоң бар ләззәттәрен татып йәшәй башлайһың: төшкә ҡәҙәре йоҡлайһың, йылға буйында балыҡ ҡармаҡлайһың, балаларың менән уйнайһың, ҡатыныңа ваҡ-төйәк эштәрҙә ярҙамлашаһың, дуҫтарың һәм яҡындарың менән осрашып, гитарала уйнап, йырлашып ултыраһығыҙ..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 4510